✓ *"Әгәр ҙә һеҙ дошманығыҙ менән мөләйем генә һөйләшә белһәгеҙ, дошманығыҙҙың дошманлығы һүрелер ҙә, телегеҙҙән сәсрәп торған осҡондар ялҡынланыуҙан туҡтар", - тигән боронғолар. Шул ваҡытта ғына Аллаһтың яҡлауына лайыҡ булырһығыҙ. Аллаһтың яҡлауы - ул кешегә бирелгән зирәк аҡыл, ишетеү өсөн ҡолаҡтар, күрер өсөн күҙҙәр, аңлаусан күңел, иманлы итер тел, тәрбиә, тәүфиҡ, ахмаҡтарҙың ахмаҡлығынан, дошмандарҙың мәкеренән һәм ғәҙелһеҙлектәрҙән һаҡлаусы кеүәт.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№34 (608)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Шөкәрә киптерергә яҙмаһын инде...



3

Балаларыбыҙ беҙҙе ҡабатлай



6

Урта быуаттарҙа башҡорттар һаны



7

Телмәреңә иғтибарлы бул,

тере шишмәне ҡыйлама



8-9

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Йәйегеҙ ниндәй мәшәҡәт, ығы-зығы менән үтте?



***Илдар ҺИҘИӘТОВ, медицина фәндәре докторы, профессор, юғары категориялы табип:*** Йәйен, ғәҙәттә, күп кеше ял итеп ҡалырға тырыша,икенселәр иһә тирләп-бешеп баҡсаһында эшләй. Нисек кенә булмаһын, йәйге ялды бик мөһим мәсьәлә тип ҡарайым, сөнки кеше нисек эшләһә, шулай ял да итә. Йәйге ялымды үҙебеҙҙең Башҡортостан тәбиғәте ҡосағында үткәреүҙе хуп күрәм, сөнки беҙҙәге кеүек кешегә көс, дарман, сәләмәтлек сығанағы булараҡ дан алған изге урындар, тәбиғәт ҡомартҡылары башҡа ерҙә юҡ. Йыл һайын Ирәмәлгә артылыуҙы бурысым тип иҫәпләйем. Быйыл йәй шулай уҡ Атышта булырға ла өлгөрҙөм, Инйәр буйлап һалда ла йөҙҙөм - ғөмүмән, ялдың әүҙем, мауыҡтырғыс төрҙәрен үҙ итәм. Әйткәндәй, быйыл Инйәрҙә балыҡ ҡармаҡлағанда бер күпйәшәр балыҡ менән дуҫлаштым. Жерех, йәғни ағасаҡ балығы, ағасъяңаҡ тип тә йөрөтәләр уны. Әллә нисә көн андыным тегене. Ниһайәт, ҡапты ғына тигәндә, ҡармаҡты өҙөп ҡасты бит был. Мин ҡармаҡ ташлайым, ә ул, мине үсекләп, эргәмдә генә йөҙөп йөрөй, ләкин ҡармаҡҡа башҡаса яҡынламай ҙа ҡуя. Миндә һунар сәме уянды: тотмайынса ҡуймайым! Тотоп булманы тәки, ләкин унда тағы ла юлланам әле. Беләм: уны барыбер эләктерәсәкмен, шунан унын айғолағына әйтергә теләгән һүҙҙәремде шыбырлармын да үбеп алырмын. Унан миңә мауыҡтырғыс ял минуттары бүләк иткән яңы дуҫымды мотлаҡ кире һыуға ебәрермен. Бына ошондай ял бик күпте бирә кешегә: тормошто, тәбиғәт хазиналарын баһаларға, ҡәҙерен белергә өйрәтә; донъяны өнһөҙ генә күҙҙән үткәрергә, уйланырға, үҙеңде борсоған проблемаларҙан ваҡытлыса булһа ла арынып торорға ярҙам итә, нервыларҙы тынысландыра. Иң мөһиме - ял осоронда күнегелгән көндәлек ритмды боҙоуға юл ҡуйылмаһын, юғиһә, ял бит әле, тип, "дилбегәне" бушатып ебәрҙеңме - сирләп китеүең дә бар. Икенсенән, ғөмүмән, ә йәй көндәре айырыуса еңелсә генә туҡланырға кәңәш итер инем, сөнки артыҡ күп ашауҙың зыяндан башҡа бер файҙаһы ла юҡ. Телевизор, компьютер алдында сәғәттәр буйы ултырыуҙың да зыяны ҙур икәнен иҫегеҙҙән сығармағыҙ, спиртлы эсемлектәр менән мауыҡмағыҙ. Иң яҡшыһы - тәбиғәткә сығып, йылға буйында ял итеү, усаҡ янында балыҡ һурпаһы бешереп, туғандарың, дуҫтарың менән аралашыу. Бик булмаһа, яҡшы китап уҡыу ҙа ифрат файҙалы ял ул.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

**Көн һайын уҡ булмаһа ла, ваҡыт табып, интернет селтәрендә көнүҙәк яңылыҡтар һәм хәбәрҙәр менән танышып барырға тырышам, ләкин уларҙың береһе лә хәтерҙә оҙаҡ һаҡланмай. Ә гәзиттән уҡыһаң, бар мәғлүмәт мейегә һеңеп ҡала. Был, бәлки, уҡыуға булған ғәҙәттән дә киләлер, сөнки беҙ бала саҡта гәзит-журналдар ғына мәғлүмәт сығанаҡтары булды. Шуға күрә әлеге ваҡытта ла ваҡытлы матбуғаттан айырылған юҡ. Йылдан-йыл хаҡтар тешләшһә лә, гәзит-журналдарға яҙылып барам һәм улар араһында иң яратып уҡығаным - "Киске Өфө" гәзите.**

# ҺӘР ВАҠЫТ ҠУЛ АҪТЫНДА...

## "Киске Өфө"!

"Киске Өфө" - һәр ваҡыт ҡул аҫтында булырға тейешле баҫмаларҙың береһе. Гәзит күп төрлө өлкәне яҡтыртыуы, шулай уҡ республикала барған хәл-ваҡиғалар тураһында мәғлүмәтте ентекле һәм үҙ ваҡытында бирә барыуы менән хуплауға лайыҡ.

Тағы ла"Киске Өфө" үҙ биттәрендә йәштәр өсөн ҡыҙыҡлы һәм фәһемле сығыштар баҫтыра. Был йәш быуын аңына үҙҙәренең уңышҡа өлгәшкән тиҫтерҙәренән өлгө алып йәшәргә һәм эшләргә тигән аҡылды һеңдерә. Йәштәрҙе гәзиткә ылыҡтырыу өҫтөндә әүҙем эшләү дөрөҫ һәм мөһим аҙым, сөнки нәҡ улар гәзиттең иртәгәге уҡыусылары, унын тиражын арттырыусылар.

Баш ҡалала йәшәүсе булараҡ, Өфөгә ҡағылышлы һәр мәҡәләне, мәғлүмәтте ентекле уҡып сығам. Ҡала нисек йәшәй, нисек "тын ала", ҡайһы өлкәһе "сирләй", ниндәй өлкәлә юғары бейеклеккә өлгәшкән - барыһы ла ҡыҙыҡ беҙҙең өсөн. Шуға күрә артабан да гәзит биттәрендә ошо даирәнең киң яҡтыртылыуына ышанам.

Хат яҙыуын яҙғас, үтенесемде лә әйтеп үтәйем. "Киске Өфө"лә төрлө өлкәлә булған асыштар хаҡында бәләкәй генә рубрика алып барылһа ине, тигән теләк бар. Көн һайын ғалимдар иҫ киткес фәнни асыштар яһай, йомро баштар шаҡ ҡатырлыҡ әллә нимәләр уйлап таба. Интернетта улар тураһында мәғлүмәт табырға була, әлбиттә, ләкин, беренсенән, барыһының да донъя селтәрендә ултырыу мөмкинлеге юҡ. Икенсенән, көн дә "Бөгөн ниндәй асыш булды икән?" тип, интернетта эҙләп ултырып булмай, ә ул хаҡта алдыңа килеп ятҡан гәзиттә баҫылһа, рәхәтләнеп уҡыйһың.

Халыҡ өсөн оло әһәмиәткә эйә баҫманың киләсәге ныҡ һәм ышаныслы булыуына, унын һәр һанын яратып, көтөп алыусы уҡыусыларының йылдан-йыл арта барыуына өмөт итәм.

**Флүр АҠСУРИН.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛ ЯҘМЫШЫ...

## йәштәр һәм хөкүмәт ҡулында

**Баймөхәмәт ШӘЙБӘКОВ, Өфө районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Ғүмер буйы ауыл хужалығы өлкәһендә эшләгән, ошо тормош менән ҡайнап йәшәгән кеше булараҡ, мине бөгөн ауылдарыбыҙ яҙмышы борсоуға һала. Ауылдағы эшһеҙлек, мәҙәниәт кимәле, йәштәрҙең - ситкә, ир-егеттәрҙең Себер яҡтарына китеүе хаҡында был күренештәрҙе үҙ күҙҙәре менән күргән һәр кем әрнеп һөйләй.

Өфө районы территорияһына ҡараған биләмәләрҙә лә, республикабыҙҙың төпкөл ауылдарындағы кеүек, йәштәр өсөн эш урыны ла, мәҙәни үҙәктәр ҙә юҡ кимәлендә. Шулай уҡ башҡа төр социаль мәсьәләләр ҙә ауыр хәл ителә. Шулай булғас, йәштәрҙе ауылда ҡалдырырға тырышыуҙан фәтүә юҡ, юғары хаҡлы эш урыны, балаларына яҡшы балалар баҡсаһы, мәктәп, төрлө үҙәктәр булмағас, уларҙың тәртәһе ситкә тарта ла тора. Күбеһе баш ҡалала, Себер яҡтарына китеп эшләй. Өфө районында ер алыу, торлаҡ төҙөү ҙә ҡиммәткә төшә. Дәүләт тарафынан булдырылған ташламаларға, маҡсатлы программаларға ла һәр кем дәғүә итә алмай. Йәшерен-батырыны юҡ, ундай хоҡуҡ та йыш ҡына туғантыуыасалыҡ, таныш-тоношлоҡ аша хәл ителә.

Әлеге көндә ауыл ерендә мәҙәниәт өлкәһендә лә көрсөк күҙәтелә. Мәҙәниәт йорттары, клубтар халыҡтың рухи талаптарын ҡәнәғәтләндереү, күңелен үҫтереү маҡсатында эшләмәй тиерлек. Йәштәр киске уйындарға элекке замандарҙағы кеүек бейергә, таныштырға, тәртипле итеп күңел асырға түгел, ә эсергә йә һуғышырға, эш боҙорға ғына йыйыла кеүек. Улар йәмәғәт эштәрендә лә бик ҡатнашып бармай. Элек спорт ярыштары, концерттар, үҙ-ара төрлө бәйгеләр үткәрелә торғайны. Йыйылыштар битараф булмаған кешеләрҙең йәнле фекер алышыу трибунаһына әйләнә ине. Хәҙер ундай битараф булмағандар ҙа күҙгә салынмай ул. Артабан да шулай дауам итһә, йәштәребеҙ йәмәғәт эштәрендә һүлпән ҡатнашһа, ауылдар яҙмышын кемдәр ҡулына тапшырырбыҙ икән, тигән борсоулы һорау тыуа. Әлбиттә, ауыл тормошон йәнләндереү, йәштәрҙе ылыҡтырырлыҡ йәшәү шарттары булдырыу дәүләт ярҙамынан тыш атҡарыла алмай, ләкин ул ярҙамды ла юллап алыр, халыҡты әйҙәп йөрөр кешеләр, йәш лидерҙар кәрәк бит.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәйегеҙ ниндәй мәшәҡәт, ығы-зығы менән үтте?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рауфан МОРТАЗИН, космоэнергетика магистры:*** Быйыл йәй ике тапҡыр Ирәмәлдә булдым, Арҡайымға барып ҡайттым. Ғаиләм менән үҙемдең тыуған яғым Салауат районында, шулай уҡ ҡатынымдың тыуған төйәге Белорет яҡтарында ла булдыҡ: туғандарҙы күреп, хәл-әхүәлдәрен белешеп, тәбиғәт ҡосағына сығып, әллә күпме дәртдарман туплап ҡайттыҡ. Билдәле, ҡала мөхите, уның ығы-зығыһы кеше һаулығына туранан-тура йоғонто яһай. Өҫтәүенә, кешеләр үҙҙәре лә ошо кире йоғонтоно көсәйтеүгә булышлыҡ итә: көнө-төнө телевизор, компьютер алдында ултырыу организмға бик көслө тәьҫир итә. Үҙегеҙ күҙәткәнегеҙ ҙә барҙыр: ауылдыҡылар ҡалаға килһә, оҙаҡ сыҙай алмай, тиҙерәк ҡайтып китеү яғын ҡарап ҡына тора. Ни өсөнмө? Сөнки улар икенсе мөхиткә, тәбиғәткә яҡын шарттарға күнеккән. Улар ҡаланыҡыларға ҡарағанда күпкә сәләмәтерәк тә. Тәбиғәткә яҡын булырға кәрәк: теге йәки был миҙгелдең нисек килеүенә, һауа торошонoң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан. Әйткәндәй, быйылғы йәйҙең шулай көтөлмәгән сюрприздарға бай булыуын күптәр ҡабул итә алмай. Ә бына балаларға ҡарағыҙ әле: йәй уртаһында ҡар яуып һалһын - улар шатлана, ә ололар ҡайғыра, көйөнә. Иртәгә 30 градус эҫе була, тип әйт - баяғы сабыйҙар барыбер шатлана, ә өлкәндәр тағы көйөнә... Тәбиғәт күренештәрен, миҙгелдәр көйһөҙлөгән нисек бар, шулай - балалар кеүек ҡабул итергә кәрәк.

***Мәнәүәрә БОХАРБАЕВА, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы:*** Йәйҙең үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Быйылғы йәйҙең ҡырыҫ килеүенә ҡарамаҫтан, һалҡындан, ямғырҙан ҡурҡып, өйҙә ултырманыҡ, әлбиттә. Ни тиһәң дә, йәй - йәй инде ул, уның бөтөн шифа-бәрәкәттәрен файҙаланып, тотош йылға етерлек йыйылһын, ҡояш нурын йәнгә-тәнгә һеңдереп ҡалырға тырыштыҡ. Ырымбурҙағы шифалы тоҙ яткылығы - Соль-Илецкиға барып ҡайттыҡ. Энә төртөр урын юҡ - бик килешә тиҙәр бит, шуға халыҡ күп йөрөй икән унда. Үҙебеҙҙең Хәйбуллала ла ял итер күркәм урындар күп ул. Балалар менән Аҡъярҙан 30 саҡрымлап ерҙәге Һаҡмар буйына төштөк, рәхәтләнеп һыу индек, ҡыҙындыҡ, балыҡ ҡармаҡланыҡ. Таналыҡ Уралға ҡойған урынды ла барып күрҙек. Ул үҙе бер ғәжәп күренеш: дала буйлап киләһең-киләһең дә, ҡапыл алыҫтан һиҙелмәйкүренмәй генә ятҡан уйнылыҡҡа килеп төшәһең. Ике йылға ҡушылған урында гүзәл күренеш хасил була: таллыҡ, яҫы, матур таштар һибелгән...

Йәйге ял ҡыҫҡа ғына бер мәл инде ул, таныһығың да ҡанмай ҡала. Әммә Крылов баснаһындағы Синерткә һымаҡ, донъяңды оноттоп китергә лә ярамай: йәй үтер ҙә китер, ҡышын ни ашарһың, тигәндәй, йәйҙең ҡыҙыуында эшләп ҡалырға ла кәрәк бит. Шуныһы рәхәт: баҡсабыҙ янда, йорт алдында ғына - көнө-төнө эшлә әйҙә. Бөтәһе лә үҫә унда: алмағас, ҡарағат, сейә, крыжовник, ирга... Хатта еҙәйенә тиклем (боярышник) ултыртҡанбыҙ. Йәшелсәне лә күп итеп үҫтерәм. Элегерәк, йәш саҡта, тоҡ-тоҡ шәкәр һатып алып, ҡайнатма эшләй, иҫәпһеҙ банка ҡыяр, помидор, башҡаһын тоҙлап ҡуя инем. Хәҙер улай күп итеп эшләмәйем, күбеһенсә балалар өсөн генә бер аҙ әҙерләп ҡуям. Помидорҙан лечо, төрлө йәшелсәнән салаттар эшләйем, ә бына еләкемештән ҡайнатманы бөтөнләй тип әйтерлек әҙерләмәйем, ер еләгенән генә ҡайнатам. Баҡса емешен, хатта ҡайһы бер йәшелсәне лә туңдырып һаҡлауға күстек. Шулай итһәң, витаминдары ла күберәк һаҡлана, файҙалыраҡ та. Йәш үтә килә, тәм-томон түгел, ә файҙаһын күберәк уйлай башлайһың икән ул ризыҡтың. Ҡайнатма - тас шәкәр бит инде ул, емештең витамины ла ҡалмай. Сәй янына ҡуйырға бал бар, умарта тотабыҙ, башҡа шәрбәтең артыҡ уның янында.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға оноҡандар барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе әле: гәзитебеҙҙе октябрҙән алдыра башлау мөмкинлеге бар. Уның өсөн 17 сентябргә тиклем почта бүлексәләренә барып, 50665 индекслы гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйындар. Өс айға яҙылыу хаҡы 253 һум 86 тингә генә төшәсәк.**

● Шулай уҡ августан "Киске Өфө" гәзитенә 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн дә яҙылыу мөмкин. Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дәртләндереү сараһы барлығын да белеһегеҙ: был юлы ла **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"; "История башкирского народа"; С. Руденконың "Башкиры"; Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"; 2015 йылға "Башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға лайыҡ булырға теләгәндәр 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәрергә онотмаһын.



● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атайәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2014 йылдың беренсе яртыһында Волга буйы федераль округында Мәғлүмәти йәмғиәт үҫеше кимәле буйынса төбәктәр рейтингында Башҡортостан дүртенсе урынды биләй. Төбәктәр рейтингы Мәғлүмәти йәмғиәт үҫеше буйынса округтың координация советы сиктәрендә 21 күрһәткес нигеҙендә төҙөлә. Улар араһында ведомство-ара электрон бәйләнеш системаһын ҡулланыу, берҙәм һәм төбәк порталдары аша электрон хеҙмәттәр күрһәтеү, күп функциялы үҙәктәр үҫеше, медицина учреждениеларына һәм балалар баҡсаларына электрон сират ойоштороу, китапханаларҙың, архив һәм музейҙарҙың каталогтарын электрон формаға күсереү күрһәткестәре бар.

✓Федераль һалымдар хеҙмәте идаралығының республика бүлексәһе "Юл приставы" тигән рейд үткәрҙе. Һалым түләргә "онотоусылар"ҙы автомобиль номерҙары буйынса асыҡлап, уларға урында уҡ бурысын түләп, квитанция алырға мөмкинлек бирелде. Түләүҙән баш тартыусыларҙың аҡса саралары, навигатор, кеҫә телефоны һәм бурысты ҡаплай алған башҡа әйберҙәре ҡулға алынды. Әгәр ҙә бурыстың суммаһы автомобиль хаҡына торошло йәки унан да үтеп китә икән, приставтар транспортты ла ҡулға алыу хоҡуғына эйә ине. БР Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт идаралығы, БР Суд приставтары федераль хеҙмәте идаралығы ярҙамында үткәрелгән был сара даими ойоштороласаҡ, тип көтөлә.

✓Республика ҡалаларында ҡомарлы уйын бизнесы менән шөғөлләнеүселәргә ҡаршы көрәшкә йүнәлтелгән рейдтар үтте. Барлығы 10 уйын клубы ябылған, уларҙан 58 берәмек уйын ҡоралы тартып алынған. Өфөлә 3 уйын клубы асыҡланған. Салауат ҡалаһында казино ябылған. Бәләбәйҙә шулай уҡ законһыҙ рәүештә эшмәкәрлек алып барған 3 клубтан 35 уйын автоматы ҡулға алынды. Аҫҡында бер осраҡ теркәлде. Әлеге мәлдә полиция хеҙмәткәрҙәре тикшеренеүҙәр үткәрә.

✓12 августа тиклем уҡый башлаған курсанттар автомәктәпте элекке программа буйынса тамамлаясаҡ. Водителдәр әҙерләү буйынса яңы программалар ҡабул ителеү сәбәпле, хәҙер автомәктәптәр эшмәкәрлегенә үҙгәрештәр индерелә. Бигерәк тә практик дәрестәр иҫәбенә уҡыу ваҡытын ҡыҫҡартыусы, шулай уҡ үҙ автодромы булмаған ойошмаларға ауырға тура киләсәк. Был бәләкәй автомәктәптәрҙең ҡыҫҡарыуына ла килтерәсәк.

***✓ Егеттәр, еңдәрегеҙҙе hыҙғанығыҙ! Күктән ергә төшөгөҙ. Ергә аяҡ терәгеҙ. Юҡhа, инвестор ҙа инвестор, тип баш ватаhығыҙ. Инвестор hүҙенән миндә аллергия башлана. Бер ниндәй ҙә инвестор беҙҙең ауылдарға аҡса hалмаясаҡ.***

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ШӨКӘРӘ КИПТЕРЕРГӘ ЯҘМАҺЫН ИНДЕ...

**Бөгөн күптәр аҡсаға аҡылын, намыҫын hата. Ҡайhы берҙә бәғзе эшмәкәрҙәргә ҡарайым да, уларҙың күкрәгендә йөрәк урынында банк иҫәбелер, тип уйлайым. Байлыҡҡа ынтылыш ҡурҡыныс түгел, теләhә ниндәй юл менән байырға тырышыу хәүефле. Хәҙерге ваҡытта аҡса түләп үрләргә, үҙенде енәйәти эҙәрлекләүҙән ҡотҡарып ҡалырға мөмкин. Ә ошо гигант средстволар иҡтисадҡа йүнәлтелhә, ул иркен тын алып ҡалыр ине, моғайын.**



Һәр дәүерҙә лә эшләргә, төҙөргә кәрәк. Минең атайым - бригадир, әсәйем ат ҡараусы ине. Үҙ белемем нигеҙендә бәйләнештәрhеҙ, аҡсаhыҙ ауыл хужалығы институтына уҡырға индем. 23 йәшемдә үҙемдең тыуған Ҡыйғы районында колхоз рәйесе итеп ҡуйҙылар. Малай ғынамын, хатта hүгенә лә белмәй инем. Биш йыл эсендә барыhына ла өйрәндем. Өфөнән бер нисә тапҡыр күсмә байраҡ алыуға өлгәштек. Һуңынан партияның өлкә комитетында, ризалығымды ла hорап тормайынса, Салауат райкомының беренсе секретары итеп раҫланылар. Ул ваҡытта йәштәрҙе, әгәр ҡулынан килгәнде күрhәләр, үҫтерәләр ине. Берәү ҙә уларҙы баҫтырып ҡалдырманы. Мин иртәнән кискә тиклем ауыл хужалығы менән булыштым. Салауат районынан hуң Тәтешле районына ебәрҙеләр. Мин эшләгән ваҡытта район Бөтә Союз ярышында өс тапҡыр еңеү яуланы. Хатта продукцияны яҡшыраҡ шарттарҙа эшләүселәргә ҡарағанда күберәк тапшыра инек. Артабан инде - ауыл хужалығы министрының беренсе урынбаҫары, hуңынан Госкомзем етәксеhе булып киттем.

Минең өсөн ер - ул йәшәү сығанағы. Әгәр кеше hыуҙан тора тибеҙ икән, ер уны туйындыра. 90 процент ризыҡты ҡоро ер бирә. Беҙҙең илдә ер ете категорияға бүленә. Беренсеhе, иң билдәлеhе - ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр. Был, образлы итеп әйткәндә, беҙҙең өҫтәлебеҙ. Ләкин шуны ла оноторға ярамай. Ер мул уңыш бирhен өсөн, уны даими ашлап торорға кәрәк. Мәҫәлән, әгәр Германияла минераль ашламаларҙы 1850 йылда ҡуллана башлаhалар, СССР-ҙа 100 йылға hуңыраҡ уяндылар. Бөгөн Германия гектарына 670 килограмм ашлама индерә, Голландия - 800, Ҡытай, Һиндостан - 400. Рәсәй - гектарына 7 килограмм. Башҡортостанда был күрhәткес 11 килограмм тәшкил итә. Ә уҙған быуаттың 90-сы йылдарында был hан 90 килограмм самаhы ине. Гектарына бер килограмм ашлама нимә ул? Ул өҫтәмә рәүештә 5-10 килограмм иген бирә. Республикала ике урында: Мәләүездә hәм Салауатта ашламалар эшләү заводын төҙөгәс, ни тиклем ҡыуанғайным. Бына хәҙер hәр ваҡыт икмәкле булырбыҙ, тип уйлағайным. Хаталанғанмын. Етештергән ашламаларыбыҙҙың 96 проценты сит илгә, мәҫәлән, Ҡытайға китә. Үҙебеҙҙә 4 проценты ғына ҡала. Ә СССР заманында гектарына 300 килограмдан ашыу ашлама индерелә ине.

Бөйөк державанан мираҫ булып 120 миллион гектар hөрөнтө ер ҡалды. Шуларҙың 40 миллионы хәҙер hөрөлмәй. Тимәк, 80 миллион тонна иген алып етермәйбеҙ. Йәғни, Рәсәй бөгөн 140 миллион тонна иген етештерә ала. Был халыҡ иҫәбенән сығып ҡарағанда, уның ихтыяжын тулыhынса ҡәнәғәтләндерә. 1987 йылда мин ошо hорау өҫтөндә уйланғайным, сағыштырып, анализ яhағайным инде. Әгәр тәбиғәт шарттарына ғына hылтанмағанда, республикала нимә үҫтерергә мөмкин? Гектарынан 14 центнер самаhы иген. Ҡырмыҫҡалы районында был күрhәткес 18 центнер самаhы булырға тейеш, сөнки унда ер уңдырышлы. Ә бына Тәтешлелә - 9 центнер самаhы ғына. Әммә осон-осҡа ялғау өсөн гектарынан кәм тигәндә 20 центнер иген алынырға тейеш. Был осраҡта, гектарына 100 килограмм ашлама индерергә кәрәк. Элек Тәтешле районы ерҙәренә гектарына ике центнер ашлама индерә инек. Һөҙөмтәлә Балтас районында уңыш гектарынан 16 центнер булды, беҙҙә - 26.

**Эшләргә теләге булған кеше шул ваҡытта уҡ юлдарын тапты. Хәҙер шундай hығымта яhайым: егеттәр, еңдәрегеҙҙе hыҙғанығыҙ! Күктән ергә төшөгөҙ. Ергә аяҡ терәгеҙ. Юҡhа, инвестор ҙа инвестор, тип баш ватаhығыҙ. Тирәк башына ҡунып ҡарҡылдашҡан ҡарғалар кеүек ауыҙ асып аҡса hорайhығыҙ. Инвестор hүҙен ишетhәм, миндә аллергия башлана. Бер ниндәй ҙә инвестор беҙҙең ауылдарға аҡса hалмаясаҡ. Улар уға Абрамовичҡа ҡурай нисек кәрәк, шулай ғына кәрәк. Нимәлер эшләгән ваҡытта ла бай әфәнделәр күп килемгә иҫәпләнгән етештереү объекттары төҙөйәсәк, әммә территорияны социаль төҙөкләндермәйәсәк. Ә бер нисә йөҙ кешегә булдырылған эш урыны - халыҡтың ихтыяжы менән сағыштырғанда, диңгеҙҙәге тамсы ғына ул. Ауылды hауыҡтырыу буйынса дәүләттең уйланылған сәйәсәте булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына нимәгәлер өлгәшә аласаҡбыҙ.**

Әлек тә проблемалар булмаңы түгел, булды. Әммә беҙ уларҙы хәл итә торғайныҡ. Бер генә етәксегә лә машина менән аҡса килтереп ауҙарманылар. Уларҙы үҙебеҙ таптыҡ. Ә хәҙер, экономиялау hылтауы менән, ауылды бөтөнләй финансламайҙар.

1990 йылда Рәсәйҙә 48 миллион баш hыйыр иҫәпләнә ине. Хәҙер hигеҙ миллион ҡалған. Республикала hыйырҙар hаны дүрт тапҡырға кәмегән. Һарыҡсылыҡ hәм сусҡасылыҡ тармаҡ булараҡ бөтөрөлдө. Уйҙырма иҡтисад, ысынбарлыҡта олигархтарҙың уйланылмаған, енәйәти сәйәсәте бына нимәгә килтерҙе.

Академик Абалкин "Рәсәйҙең аграр фажиғәhе" тип аталған мәҡәлә баҫтырғайны. Атамаhы уҡ йөкмәткеhен асып бирә. Әммә уны ишетмәнеләр. Рәсәй Президенты РФ Дәүләт Думаhы депутаттарына Мөрәжәғәтнамәhендә, илебеҙгә донъялағы сәсеүлектең 55 проценты тура килә, тип белдерҙе. Уға сығыш әҙерләгән консультанттар нимә уйлағандыр, әммә был hан ете тапҡырға арттырылған. Уларҙың ниндәй отчеттар яҙыуын шунан сығып та күҙалларға мөмкин. Тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәм: Рәсәйгә Ер шарындағы сәсеүлектәрҙең 8 проценты тура килә. Әммә уның өстән бер өлөшө, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, эшкәртелмәй. Был миллион гектарҙан да күберәк. Уларҙы, бер нигеҙhеҙ, деградацияланыусылар иҫәбенә индерҙеләр.

Ни өсөн шулай килеп сыҡты hуң? Сөнки дилетанттар hәм бушбоғаҙҙар дәүере килде. Рәсәйҙә ауыл хужалығы менән ауылды белмәгән кешеләр идара итә. Аграр производствола тулы тәжрибәhе булмаған кешеләрҙе үрләтәләр. Ябай формула эшләй: уҡының - оҡшаның - үҫ. Шуға, реформалар осоронда илдә 50 меңдән ашыу ауыл бөтөрөлөүенә аптырайhы ла түгел! Уларҙың hәр ҡайhыhының артында - юғалған яҙмыштар, юғалған уңыш hәм hауым. Бөгөн ауылда кемдәр йәшәй? Нигеҙҙә, пенсионерҙар. Уларҙың ер пайҙары бар. Әммә уларҙың кем ҡулында булыуын hәм нисек файҙаланылғанын берәү ҙә белмәй. Ҡуртым хаҡын да алмайҙар. Мунсалары бар, hарайҙары, баҡсалары, картуф үҫтерәләр. Барлыҡ ҡыҙыҡhыныуҙары ошо. Ә дәүләттең тормош усағы быҫҡып торған утрауҙарҙа эше лә юҡ. Бер нисә йылдан hуң был усаҡтар ҙа hүнәсәк. Эттәр өрөүе лә ишетелмәйәсәк. Йыhан вакуумындағы кеүек тынлыҡ урынлашасаҡ. Уны бары тик әсе елдең hыҙғырыуы hәм hуңғы крәҫтиәндең ерҙән айырылыуын ауыр кисереп илаған ямғыр тамсылары тауышы ғына боҙасаҡ.

Ауылды, аграр производствоны ҡотҡарыу өсөн велосипед уйлап сығарырға кәрәкмәй. Бары тик сит ил тәжрибәhенә генә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Бөтөн донъяла ауыл хужалығы секторына бюджет аҡсаларының 40 проценты китә. Швейцарияла, Финляндияла хатта 80 процентҡа тиклем. Рәсәйҙә был күрhәткес 18 процент ине. Хәҙерге иhә был hан ни бары 1 процент ҡына! Бындай диспропорция нимә менән янай? Теләhә ҡайhы ваҡытта аҙыҡ-түлекте сит илдән алыуҙы тыйыуҙары менән. Ә Рәсәй Һөтсөләре союзы рәйесе Андрей Даниленко белдереүенсә, былтыр илгә ситтән hөт индереү 60 процентҡа артҡан. Ҡайҙа тәгәрәйбеҙ? Хәүефhеҙлек сиген күптән үтеп киткәнбеҙ инде. Һәм тиҙ арала хәл-торошто тамырынын үҙгәртмәгәндә, фажиғә янай.

Крәҫтиәнгә артабан да Мәскәүгә, ҙур етәкселеккә өмөтләнергә ярамай. Артабан нисек йәшәүен ул үҙе хәл итергә тейеш. Йыйылышырға, проблемаларҙы уртаға hалып hөйләшергә, инициативалы hәм ерҙе яратҡан кешеләрҙе лидер итергә. Юҡhа, юҡҡа сығасаҡбыҙ. Ә сит илдәге күршеләребеҙгә шул ғына кәрәк тә инде. Улар шуны ғына көтә түгел, ә дәүләт структураларындағы ҡайhы бер әфәнделәрҙе майлап, ошо йүнәлештә әүҙем эшләй. Әгәр hөрөнтө ерҙәребеҙгә урман үҫhә, дәүләткә шөкәрә киптереүҙән башҡа сара ҡалмаясаҡ...

**Радил МӨХӘМӘТДИНОВ,**
**Башҡортостан Дәүләт хеҙмәте hәм идараhы академияhы профессоры.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡорт дәүләт университеты граждандарҙың льготалы категорияhын БДИ-ға әҙерләү курстарына саҡыра. Интенсив курстар бушлай, улар БДУ hәм уның филиалдарында 1 октябрҙән 2015 йылдың 31 майына тиклем барасаҡ. Был төркөмгә етемдәр, ата-әсә ҡарауынан ҡалған балалар, инвалидтар, I төркөм инвалиды булған ата йәки әсә тәрбиәhендәге 20 йәшкә тиклемге үҫмерҙәр, хәрби бурысын үтәгәндә hәләк булыусыларҙың балалары, хәрби хеҙмәт үткән hәм командирҙарынан тәҡдим хаты булғандар, контракт буйынса 3 йылдан кәм хеҙмәт итмәгән граждандар, Төньяҡ-Кавказ төбәгендә контртеррористик операцияларҙа ҡатнашҡан hәм әлеге мәлдә хәрби хеҙмәттә, Эске эштәр министлығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, ФСИН, ФКСН хеҙмәткәре булып эшләүселәр инә. Теләүселәр 25 сентябргә тиклем ғариза яҙырға тейеш. Белешмә өсөн телефон: 8(347)272-25-68.

✓Башҡортостанды балыҡ менән тәьмин итеүсе компаниялар берләшә. Улар ошо юл менән Алыҫ Көнсығыш hәм Төркиәнең балыҡ етештереүсе предприятиеларынан күмәртәләп балыҡ hатып аласаҡ. Әлеге мәлдә республикала ҡулланылған балыҡтың 10 процентын ғына үҙебеҙҙә етештерәләр. Шуға ла инделгән эмбарго hөҙөмтәhендә юҡҡа сығасаҡ ассортиментты тулыландырыу юлдарын эҙләргә кәрәк. Тиҙҙән республика hыуhаҡлағыстарында балыҡ үрсетеү проекты өҫтөндә эш башланасаҡ.

✓2021 йылда 11-се Бөтөн донъя уйындарында ҡатнашыу хоҡуғына дәғүә итеүсе Өфө ҡалаhы спорттың күрhәтмә төрҙәре исемлегенә көрәште лә индерҙе. Унда шулай уҡ самбо, йәйге биатлон, баскетбол, мини-гольф та бар. Әлеге мәлдә Бөтөн донъя уйындарында ҡатнашасаҡ объекттар билдәләнгән, унда "Динамо", "Нефтсе", "Төҙөүсе" стадиондары, "Биатлон" спорт-hауыҡтырыу комплексы, "Аҡбуҙат" ипподромы, "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт hәм ял итеү паркы, "Первушино" аэродромы, "Өфө-Арена" боҙ hарайы, Спорт hарайы hәм башҡа ҡоролмалар ингән. Быларҙан тыш, тағы ла 4 спорт объекты төҙөләсәк. Еңеүсе ҡала 2015 йылдың март-апрелендә билдәле буласаҡ.

✓Өфөлә "Металлобаза" автотранспорт туҡталышы районында юл өҫтөнән йәйәүлеләр үтеү юлы төҙөләсәк. Ул яҡынса 54 метр оҙонлоҡта, 2,25 метр киңлектә буласаҡ, унан сәғәтенә 4,5 мең кеше үтеп йөрөй аласаҡ. Уны алты ай эсендә төҙөргә планлаштыралар. Был сара Өфө-Аэропорт юлында аварияләр hанын күпкә ҡыҫҡартыр, тип көтөлә.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠЫҘҘАРҒА - ӨЙ...

## малайҙарға - автобус...



**Мин һәр ваҡыт ҡул эше менән булырға, бигерәк тә тегергә яраттым. Мәктәп йылдарында уҡ төрлө журналдарҙа сыҡҡан һыҙмалар буйынса күлдәк һәм башҡа әйберҙәр тегеү менән мауыҡтым. Әлеге мәлдә лә буш ваҡыттарымда тегеүгә ултырам. Был шөғөлөм миңә ял итеү мөмкинлеге генә түгел, ә аҡса эшләү ысулы ла бирә.**

Һәр бала өй төҙөп уйнарға ярата. Бының өсөн, ғәҙәттә, өҫтәл, ултырғыс һәм башҡа мебель, шулай уҡ юрған, ашъяулыҡ, мендәр ҡулланыла. Ә хәҙер магазиндарҙа махсус эшләнгән өй-трансформерҙар һатып алырға ла була. Был өлкәнең килемле икәнлеген аңлаған уйынсыҡ эшләүсе компаниялар өйҙәрҙән тыш, башҡа төрлө әйберҙәр ҙә эшләп һатыуға сығара. Ләкин уларҙың хаҡы "тешләшә". Шул уҡ ваҡытта бындай әйберҙәр үҙең эшләгәндә күпкә осһоҙ килеп сыға. Бының бер ауырлығы ла юҡ һәм уны өйҙә алып барырға мөмкин булған эшҡыуарлыҡтың бер төрө булараҡ ҡулланырға була.

Мин шулай иттем дә. Бәләкәй ҡыҙым уйынсыҡ магазинына ингән һайын ошондай өй һорағас, уны үҙем эшләргә ҡарар иттем. Бының өсөн 2-3 төрлө сағыу материал, ныҡ һәм һығылмалы тимерсыбыҡ һатып алдым. Ҡыҙым күрергә теләгән уйынсыҡ өйҙө эшләү өсөн бер көн ваҡыт талап ителде. Ҡыҙымдың ишеге һәм тәҙрәләге ҡорғандары асылып-ябылып торған өйгә шатлығын күреү үҙе бәхет булды. Икенсе көндө ҡунаҡҡа килгән ахирәтем ҡыҙына ла ошондай уҡ уйынсыҡ өй эшләһәм, 1 мең һум түләйәсәген әйтте. Мин риза булдым һәм икенсе көндө уҡ эшкә тотондом. Дүрт сәғәт эсендә уйынсыҡ өй әҙер булды. Шулай итеп, уйламағанда 700 һум аҡса эшләнем (Эш өсөн кәрәкле материалдар яҡынса 300-400 һумға барып баҫты).

Артабан заказдар күбәйҙе. Аҙнаһына, кәмендә, икеөс уйынсыҡ эшләйем. Ҡыҙҙарға төрлө ҙурлыҡтағы һәм биҙәлештәге өй эшләп биреүҙе һораһалар, малайҙар араһында эсенә инеп ултырырға мөмкин булған машина, автобус кеүек транспорт ҙур һорау менән файҙаланыла. Эштең хаҡы әйберҙең ҙурлығына һәм ҡатмарлығынан сығып билдәләнә. Мәҫәлән, автобус эшләү өсөн яҡынса киңлеге 1,5 метр булған 6,5 метр туҡыма кәрәк. Балалар өсөн булғас, сағыу төҫтәрҙе ҡулланыу яҡшы. Шулай уҡ тимерсыбыҡ, йөбешеүсе таҫма һәм башҡа ваҡ-төйәк талап ителә. Бер-нисә сәғәт эсендә матур ғына автобус килеп сыға. Автобустың да ишеге һәм тәҙрәләренең асылыуы-ябылыуы мотлаҡ, сөнки балалар өсөн иң ҡыҙығы шунда.

Бына ошондай ысул менән бер аҙнала, кәмендә, 3 мең аҡса эшләйем. Күберәк тә эшләргә мөмкин, ләкин бер аҙнала өс әйберҙән артыҡ заказ ҡабул итмәйем. Был ҡағиҙә миңә ваҡытымды ғаиләмә етерлек кимәлдә бүлеү мөмкинлеге бирә. Гәзит уҡыусылар араһында минең яҙғанды уҡып, аҡса эшләүселәр табылһа, шат булырмын.

**Гөлсәм ЯҠУПОВА, Мәләүез ҡалаһы.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# МӘКТӘПТӘР ӘҘЕРМЕ?

**Өфө ҡала округы хакимиәте етәкселәре, ғәҙәттәгесә, мәғариф учреждениеларының яңы уҡыу йылына әҙерлеген тикшерҙе. Сара барышында мәғариф объекттарының матди-техник йыһазландырылыуына, ремонт эштәре үткәрелеүгә, уҡыу кластарының һәм ярҙамсы биналарҙың торошона, эргә-тирәләге территорияның төҙөклөгөнә ныҡлы иғтибар бирелде.**

Маршрут Адмирал Макаров урамы, 20 адресы буйынса урынлашҡан 156-сы урта мәктәптән башланды. Ул бынан 10 йыл элек үҙ ишектәрен аса. Бөгөн бында бер сменала 562 бала уҡый. 27 кабинетта 23 класс шөғөлләнә. Мәктәптә спорт һәм күнекмә залдары, ике компьютер класы бар. Бер нисә йыл рәттән мәктәп БДИ үткәреү пункты булып тора. 2011 йылдан бында С. О. Макаров исемендәге Хәрби-диңгеҙ флоты музейы эшләй. Былтыр мәктәп бинаһы нигеҙендә "Супермалыш" шәхси балалар баҡсаһы асылған. Бындай хеҙмәттәшлек ике яҡ өсөн дә файҙалы: мәктәп ҡуртым өсөн хаҡ ала, шул арҡала бер класс уҡыусылар өсөн мебель менән йыһазландырылған. Балалар баҡсаһына инеү айырым.

Икенсе туҡталыш Маршал Жуков исемендәге урам, 20/1 адресы буйынса урынлашҡан 55-се балалар баҡсаһы - Балаларҙың үҫеш үҙәге. Бында 325 бала йөрөй. 10 төрлө йәштәге балалар төркөмө, шулай уҡ балаларға белем биреү эшмәкәрлеге өсөн өҫтәмә функциональ биналар: музыка залы, бассейн, ике спорт залы, сенсор бүлмәһе, логопункт, педагог-психолог бүлмәһе эшләй. Учреждениеның өҫтөнлөклө йүнәлеше булып балаларҙың донъяны танып белеүе, социаль-коммуникатив, телмәр, художество-эстетика һәм физик үҫеше тора.

Төхвәт Йәнәби урамы, 49/1 адресы буйынса урынлашҡан 68-се лицейҙа дидактик дизайн технологияларын һәм индивидуаллләштерелгән уҡытыуҙы интеграциялау һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнеүселәрҙең социаль уңышын формалаштырыу буйынса ике тәжрибә майҙансығы бар. Сентябрҙән иһә лицейҙа БРҙың Мәғарифты үҫтереү институтының "Электрон мәктәп" инновацион майҙансығы асыласаҡ. Белем усағы "РОСНАНО-ның мәктәп лигаһы" Федераль электрон белем биреү берләшмәһе ҡатнашыусыһы булып тора.

Дөйөм алғанда, асыҡланған етешһеҙлектәр яңы уҡыу йылына тиклем бөтөрөләргә тейеш, тигән иҫкәрмәләрҙе иҫәпкә алмағанда, мәғариф учреждениеларының әҙерлеге яҡшы баһаланды.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ХӘБӘР ИТ!

**Үткән аҙнала аҙыҡ-түлеккә хаҡтар мониторингы һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, сырьеның һәм етештереүсе предприятиеларҙа тауарҙарҙың хаҡтары күтәрелмәһә лә, һатыу нөктәләрендә аҙыҡ-түлеккә хаҡтар 6 позицияға күтәрелгән.**

Унда ҡара сәй (2,5 процент), ҡаймаҡ (1,8 процент), һөт (1,4 процент), балыҡ консервалары (1,1 процент) инә. Был турала Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитовтың Хөкүмәт ағзалары менән үткәргән кәңәшмәһендә билдәләнде. Шул уҡ ваҡытта, республикала йәшелсәләргә хаҡтар төшә. Ошо арала Туймазыла йәшелсә етештереүселәр ҡатнашлығында кәңәшмә үткәреү планлаштырылған. Урындағы етештереүселәргә үҙ продукцияһын һатыуҙа ярҙам итеү өсөн республика ҡалаларында 23 августан йәшелсә һәм бал йәрминкәләре үтә башлаясаҡ, тип тә билдәләнде.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса 14 августан аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙы күҙәтеү өсөн республика штабы булдырылды. Башҡортостан халҡы ауыл хужалығы продукттарына хаҡтарҙың күтәрелеүе фактары тураһында (347) 218-09-78 телефоны буйынса хәбәр итә ала. "Ҡыҙыу линия" дүшәмбе - йома иртәнгә 9-ҙан киске 18 сәғәткә тиклем эшләй.

## ЮЛДАР САТЫНДА...

**Башҡортостан Республикаһы башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса Өфө ҡала округы хакимиәтенә Интернациональ урамы сатында яңы күпер төҙөү һәм Воровский урамы сатында урынлашҡан күперҙе реконструкциялау проектын әҙерләү бурысы йөкмәтелде.**

Ошо көндәрҙә хакимиәттә "Институт Гипростроймост" асыҡ акционерҙар йәмғиәте вәкилдәре менән осрашыу үтте. Воровский урамы киҫелешендәге күпер әлеге ваҡытта ике һыҙатлы юл булараҡ файҙаланыла. Проектлаусылар күҙаллауынса, реконструкциянан һуң объект дүрт һыҙатҡаса киңәйеүе ихтимал.

Интернациональ урамы киҫешендәге күпер иһә Затон күперенең һәм ҡайһы бер үҙәк урамдарҙың көсөргәнешен кәметергә, ҡаланың төньяҡ өлөшөнә инеүҙе тәьмин итергә тейеш. Икенсе яҡтан был объект баш ҡала өсөн Ағиҙел арьяғындағы ҙур террито-

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Черниковка биҫтәһе 70 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Байрам концерты Өфө моторҙар төҙөү берләшмәһенең мәҙәниәт һарайы алдында үтә. Ойоштороусылар билдәләүенсә, унда ҡатнашыусылар төрлө конкурстарҙа, шулай уҡ армрестлинг, арҡан тартыу, ястыҡтар менән һуғышыу, шашка кеүек спорт ярыштарында көс һынаша аласаҡ. Иң йәш ҡунаҡтар балалар майҙансығында күңел аса аласаҡ.

✓Өфө йыл һайын үткәрелгән "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсы еңеүсеһе булды. Баш ҡалабыҙ унда конкурстың өс йүнәлешендә: "Иң яҡшы ҡала округы", "Ҡала округының иң яҡшы муниципаль хеҙмәткәре", "Иң яҡшы рәсми сайт" номинацияларында алдынғы урынды бирмәне. Ике номинация буйынса Ғафури, Ишембай, Хәйбулла районы, Күмертау һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары еңеүсе тип табылды. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса 23 муниципаль берәмеккә аҡсалата премиялар тапшырыласаҡ, уның дөйөм суммаһы - 3 млн 650 мең һум.

✓Өфө ярымутрауын үҫтереү - баш ҡаланың ҡала төҙөү сәйәсәтенең төп векторы булып торасаҡ. Экспертар билдәләүенсә, ярымутрауҙы төҙөлгән йорттарҙың ҡаттары һанын арттырыу иҫәбенә ҙурайтыу дөрөҫ булаҡ. Ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Александр Филиппов әйтеүенсә, унда шулай уҡ инженер селтәрҙәре реконструкцияланасаҡ, юлдар тәртипкә килтереләсәк, парктар иҫәбе күбәйтеләсәк.

✓Орджоникидзе районында воркаут менән шөғөлләнеү өсөн спорт майҙансығы асылды. Унда ойоштолрған тәүге ярыштарҙа Нефтекама, Салауат һәм Өфө ҡалаларынан 9-18 йәштәге спортсылар ҡатнашты.

✓23 августа Орджоникидзе исемендәге майҙанда "Иглин һуғаны, Иглин балы - 2014" йәрминкәһе үтә. Бал менән һуғандан тыш, унда йәшелсә, ит һәм һөт продукттары тәкдим ителәсәк. Йәрминкә сиктәрендә байрам концерты ла ойоштороло, унда Иглин районынан килгән һәүәҫкәр артистар ҡатнашасаҡ. Йәрминкә сәғәт 9-ҙа асыла. Өфөнөң Йәштәр һарайы алдындағы майҙанда 23-24, 30-31 августа бал йәрминкәләре лә үтәсәк.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Уның төп маҡсаты - Европа менән Рәсәйҙең иҡтисади хеҙмәттәшлеген юҡҡа сығарыу һәм Европаға үҙ тауарҙарын "тығыу" ине, буғай. Йәғни, бер атыуҙа - ике ҡуян. Ләкин Американың был хәйләһе тағы ла барып сыҡмаясаҡ, тип ышанайыҡ.*



КӨН ҠАҘАҒЫ



# ҠАНЛЫ БӘРЕЛЕШТӘР...

## тамамланырмы?

**Донъяла кешене ҡыҙыҡһындырған өс төрлө субстанция, йәғни, өс үҙгәрмәҫ нигеҙ бар: ашамлыҡ, энергия һәм мәғлүмәт. Ошо өс субстанцияға эйә булыу, уны таратыуҙы контролдә тотоу маҡсатында кешелек ғүмере буйына һуғышҡан һәм һуғыша.**

Егерменсе быуатҡа тиклем бар дәүләттәр аҙыҡ-түлек өсөн низағлашһа, егерменсе быуатта донъя һуғыштары башлыса кемдендер энергия ятҡылыҡтарына эйә булырға теләүе сәбәпле башланды. Егерме беренсе быуатта төп иғтибар мәғлүмәт менән идара итеү юҫығына йүнәлтелде. Хәҙер иһә, тиҫтәләгән йылдар һуҙымында төрлө сәбәптәр арҡаһында берберећенә ҡаршы ҡуйылған илдәр мәғлүмәти һөжүмдә төп ҡоралына әйләнделәр. Был һөжүм асыҡтан-асыҡ түгел, ә йәшерен эшләнде. Һөҙөмтәлә, ябай халыҡ теге йәки был ваҡиғаны ҡабартылған сәйәси ваҡиға булараҡ ҡына ҡабул итһә, айырым кешеләр иһә улар артында яҡшы уйланылған план тороуын белде.

Сәйәсәттә нувориштар, йәғни, алыпһатарлыҡ менән байыған кешеләр билдәләй. Мәҫәлән, АҠШ-та йәшәүсе Рокфеллерҙың ҡаҙнаһында бөгөн 3 триллион доллар аҡса бар икән, ул, әгәр теләһә, үҙенең күңеле яҡкан теләһә ниндәй илде төбө-тамыры менән һатып ала ала. Ундайҙарға үҙ дәүләтендә халыҡ мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан сәйәсәт ҡылыусы хакимдар кәрәкме? Юҡ, әлбиттә. Уларға ришүәт биреүсе, көнәштәрҙе, шелтәләрҙе һис һүҙһеҙ ҡабул итеүсе хакимдар унайлыраҡ. Ливияның элекке президенты Муаммар Каддафиҙы, үҙ илендә Америка долларын әйләнештән сығарыу юлын һайлауҙары тураһында белдереүҙәр яһай башлағас, үлтереп тә ҡуйҙылар. Ошондай сәйәси енәйәтселәр бөгөн Рәсәйгә ҡаршы мәғлүмәт һуғышын көсәйтеп ебәрҙе.

Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың һуңғы ярты йыл эсендә алып барған сәйәсәте күптәрҙә, шул иҫәптән миндә лә, ышаныс уята. Был - дөрөҫ сәйәсәт, тип уйлайым. Февраль айында төбәктең бер интернет сайтында Украина, Ҡырым тураһында һүҙ сыҡҡас, мин дә үҙемдең фекерҙәремде, киләсәккә ҡуҙаллауҙарымды яҙып ебәргәйнем. Ҡырымды - алырға, Украинаның көнсығыш өлкәләренә теймәҫкә кәрәклеген билдәләгәйнем. Тағы, ошо көрсөк ваҡытында Рәсәйгә Ҡытай менән союз төҙөргә кәрәклеген, ул саҡта Япония ла, Һиндостан да Рәсәйгә теләктәшлек белдеререн фаразланым. "Донъяның үҙәге Көнсығышта буласаҡ", тип тә яҙҙым. Ул ваҡытта был яҙмаларҙы интернетта етди ҡабул итеүсе булманы, тиһәң дә була. Бөгөн тап шуны күҙәтәбеҙ: Ҡырым Рәсәйгә ҡушылды, Украинаның көнсығышындағы ике өлкәгә Рәсәй үҙ ғәскәрен индермәне. Донъя аренаһында Ҡытай менән газ юлдары буйынса хеҙмәттәшлеккә ҡул ҡуйылды. Был проектты күреп, Япония парламентарийҙары, Сахалиндан Японияға газ торбаһы үткәрергә кәрәк, тигән белдереү яһаны. Яңыраҡ Һиндостан: "Ҡытайға киткән газ торбаһын Һиндостанға ла борорға кәрәк", - тигән теләк белдерҙе. Был килешеүҙәр АҠШ-ты "уйындан" ситтә ҡалдырҙы, Европа бөтөнләй ҡыҫылды.

Украиналағы ҡан ҡойош АҠШ заказы буйынса атҡарыла икәнлеге һәр кемгә мәғлүм. Америка һуңғы йылдарҙа төрлө локаль һуғыштар ойоштороп, уларҙа уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Украина ярҙамында "хәл йыйырға" булды, ахыры. Уның төп маҡсаты - Европа менән Рәсәйҙең иҡтисади хеҙмәттәшлеген юҡҡа сығарыу һәм Европаға үҙ тауарҙарын "тығыу" ине, буғай. Йәғни, бер атыуҙа - ике ҡуян. Ләкин Американың был хәйләһе тағы ла барып сыҡмаясаҡ, тип ышанайыҡ.

Украинала һуғыш ҡасан тамамланыр? Был һуғыш, ҡапыл ғына башланмаған кеүек, тиҙ генә тамамланмаҫ һымаҡ. Был мәғәнәһеҙ бәрелештәрҙе дипломатик сараларҙан бигерәк, ОБСЕ эгидаһы аҫтында индерелгән тыныслыҡ һаҡлаусы ғәскәрҙәр генә туҡтата алыр, моғайын. Көнбайыш Украинаға - Европанан, көнсығышҡа - Рәсәйҙән һалдаттар индерелеп, улар уртала осрашһа, һуғыш та тамамланыр, ахыры.

**Ҡадир МӘҒӘФҮРОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор.**

# ИНОРСТА МАЙҘАНСЫҠТАР

**Быйыл Инорс биҫтәһендә дүрт яңы балалар майҙансығы урынлаштырыласаҡ. Ошо йүнәлештә эштәр адреслы ҡала программаһы сиктәрендә ихаталарҙы ремонтлау һәм төҙөкләндереү менән бер рәттән алып барыла.**

Г. Мушников урамындағы 1-се һәм 13-сө йорттарҙың ихаталарында эш тамамланған да инде. Бында урамға үтеү юлдары киңәйтелгән, яңы бордюрҙар ҡуйылған, газондарҙың кәртәләре яңыртылған, йәйәүлеләр юлдары булдырылған, машиналарҙы парковкалау урындары йыһазландырылған. Шулай уҡ территорияны йәшелләндереү планлаштырылған. Йорттарҙа йәшәүселәр, әгәр үҫентеләр килтерелһә, үҙҙәре уҡ ағастар ултыртырға риза. Бындай тәжрибә Инорстың бик күп йорттарында бер нисә йыл дауамында ҡулланыла ла инде. Милекселәр балалар майҙансығындағы ҡорамалдарҙың иҫкереүен һәм балаларҙың күрше йорт ихатаһындағы яңы заманса майҙансыҡҡа йөрөүен билдәләп, үҙ ихаталарында ла балалар майҙансығы эшләүҙе һорай. Транспорт урамы, 30/5 йорто ихатаһында иһә эштәр дауам итә. Объект сентябргә рияға сығыуға транспорт коридоры булараҡ та мөһим әһәмиәткә эйә.

# ЯМҒЫР ЯУА, ҺЫУ БАҪА...

**Баш ҡала округы хакимиәтендә юл ҡатламын реконструкциялауҙы көтөп тормайынса, ямғыр һыуын ағыҙыуҙың аҙ көс, ваҡыт һәм сығымдар талап иткән альтернатив вариантын эшләй башлағандар.**

Дренаж системаһын үҫтереү буйынса эшмәкәрлек һуңғы ике йылда тергеҙелгән. Әлеге ваҡытта ямғыр һыуы канализацияһы селтәре юлдарҙы реконструкциялау һәм капиталь ремонтлау сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Дренаж системалары, яңы инженер селтәрҙәре урамдарҙы тейешле киңлеккә еткергән осраҡта һалына. 2013 йылда бындай эш Киров районының Сочи урамында алып барылды. Быйыл иһә Калинин районының Интернациональ һәм Вологодский урамдары яңы канализациялы булды. Бынан тыш, дренаж, ямғыр һыуы канализацияһы һәм таҙартыу ҡоролмалары капиталь төҙөлөш объекттарының проекттарын ҡарау һәм улар буйынса килешеү төҙөгәндә төп шарт булып тора.

файҙаланыуға тапшырылырға тейеш. Күрше ихатала төҙөкләндереү тамамланыу алдында - әлеге ваҡытта газондарҙың кәртәләре монтажлана.

Әммә төҙөкләндереү эштәренең дә ике осо бар икән - юлдарҙа тип-тигеҙ асфальт булғас, тиҙлек яратыусылар йорт алдынан да ҙур тиҙлек менән үтә. Был мәсьәләне хәл итеү маҡсатында яҡын арала ихаталарҙа махсус билдә ҡуйыласаҡ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МОПЕДТА ЙӨРӨР ӨСӨН ДӘ...

## таныҡлыҡ кәрәк

**Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығында водителдәрҙе һөнәри уҡытыу буйынса яңы программаларҙы раҫлаусы бойороҡ көсөнә инде."Мәғариф тураһында" һәм "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында" ике законға етди төҙәтмәләр ҡабул ителде. Беренсенән, автомәктәптәрҙә уҡытыу хәҙер һөнәри белем биреү статусына эйә була, тимәк, был уҡыу йорттарына талаптар арттырыла, икенсенән, уҡыу программалары ла үҙгәртелә.**

Хәҙер теория һәм практика буйынса сәғәттәр һаны өҫтәлә. Теләге булған кеше уҡып, "автомат" автомобиль йөрөтөүгә имтихан тапшыра ала. Бынан тыш, мопед йөрөтөүгә лә таныҡлыҡ алырға мөмкин. Мәғариф министрлығында яңыраҡ ҡына барлыҡҡа килгән A1, B1, C1,D1,C1E һәм D1E һәм башҡа категориялар буйынса 16 программа төҙөлдө. М- D1 - скутер һәм мопедтар өсөн өр-яңы уҡытыу нормалары эшләнде. Еңел автомобиль йөрөтөүгә таныҡлыҡ алыу өсөн теория сәғәттәре 106-нан 136-ға, ә йөрөтөү буйынса күнекмәләр 50-нән 56 сәғәткә тиклем оҙайтылды.

Яңы программала предметтар һаны өс төрлө: нигеҙ, махсус һәм һөнәри циклдарға бүленде. Мәҫәлән, нигеҙ төргә "Юл хәрәкәте өлкәһендәге закон нигеҙҙәре","Транспорт саралары менән идара итеү нигеҙҙәре","Водитель эшмәкәрлегенең психик-физиологик нигеҙҙәре", "Тәүге ярҙам" тигән предметтар индерелгән.

Яңы ҡағиҙәләргә ярашлы, автомәктәптәрҙең матди-техник тәьмин ителешенә талаптар ҙа артты. Уҡыу йорттары ҡарамағында дөйөм майҙаны 2,4 мең кв. метрҙан да кәм булмаған автодром, интерактив таҡталар булырға тейеш. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, бөгөн Рәсәйҙә 10 меңләп автомәктәп йылына 2 млн. водитель әҙерләй. Ләкин был учреждениеларҙың барыһы ла яңы талаптарға яуап биреп бөтмәй. Өфөлә, мәҫәлән, БР уҡыу-курс комбинатының 7 гектар майҙанлы автодромы ғына бар. Баш ҡалалағы башҡа автомәктәптәр үҙ курсанттарын машина йөрөтөргә өйрәтеү һәм ЮХХДИ имтихандарын тапшырыу өсөн уны ҡуртымға алып файҙалана.

**Арина РӘХИМҒОЛОВА.**
**"Башинформ".**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған көңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Атеросклероз

❖ Атеросклероз ваҡытында ҡолаҡ шаулауы ла күҙәтелһә, өс ай дауамында туғай клеверы (клевер луговой) төнәтмәһе эсергә кәрәк. Бер ай дауаланғандан һуң, бер аҙна ял итеп алыу мотлаҡ. Ярты йыл үткәндән һуң тағы бер курс дауаланырға. Төнәтмә әҙерләү өсөн: 1 литрлы банканың яртыһына тиклем өҫкө япраҡтары менән өҙөлгән клевер сәскәләрен тултырырға. Банка тулғансы араҡы ҡойорға. 2 аҙна ҡараңғы урында тоторға. Төшкө аш йәки йоҡлар алдынан көнөнә 1 тапҡыр 1 ҡалаҡ эсергә.

## Аҙ ҡанлылыҡ

❖ 2 балғалаҡ мышар емешенә 0,4 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Әҙер төнәтмәгә бер аҙ шәкәр йәки бал өҫтәп, 3-4 өләшкә бүлеп, көн дауамында эсеп бөтөргә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән айваға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, 10 минут талғын утта ҡайнатырға һәм тағы ла 30 минут төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Литрлы шешәгә май айында йыйылған әрем үләнен тултырырға, араҡы өҫтәргә. 21 көн ҡараңғы урында тоторға. Түбәндәге схема буйынса ҡулланырға: 1 тамсы төнәтмәгә 1 ҡалаҡ ҡайнатып һыуытылған һыу өҫтәп, иртән, ас ҡарынға эсергә. 3 аҙна ҡабул иткәндән һуң, 2 аҙна ял итергә, тағы ҡабатларға.

❖ Йәш кесерткәндән щи бешереп ашарға. Бер ус кесерткәнгә 1 литр һыу кәрәк.

❖ 10 грамм туғай клеверы сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 45 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ ваҡытында ҡайын еләге, айыу баланы (жимолость), мүшмел (кизил) емештәре ашау файҙалы.

❖ Ҡара торма, сөгөлдөр, кишер һутын тигеҙ өлөштә алып, ҡара төҫтәге шешәгә һалырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 15 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 3 ай.

❖ Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ әрем һуты эсергә. Теләһәгеҙ, бал менән ҡушырға мөмкин.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ӨЙ КҮТӘРЕҮ

**Борондан башҡорттарҙа өй күтәреү тотош ауыл өсөн мөһим бер ваҡиға булған. Иң тәүҙә күмәкләп буласаҡ торлаҡ өсөн урын һайланған. Мал йәки ҡош-ҡорт ял итергә яраҡлы урын яҡшы, тип иҫәпләнгән. Урын һайлашһындар өсөн төҙөлөш эшен белгән 5-10 ир-егет саҡырылған, уларға мул итеп табын ябылған.**

Нигеҙ һалғанда махсус рәүештә аят уҡытылған, ҡайһы бер төбәктәрҙә аҡ бәхеттәр теләп, нигеҙҙең дүрт мөйөшөнә көмөш тәңкәләр һалғандар, һөт ризыҡтары һипкәндәр йәки ҡатыҡлы һауыт күмеп ҡалдырылған. Нигеҙ бутҡаһы йолаһы атҡарылған, бутҡа бешереп, барыһын да һыйлағандар. Көньяҡ-көнсығыш районда ҙа был йола нигеҙ ҡорбаны ашау йәки ҡорбан ашау, тип аталған һәм унда ҡорбанға һарыҡ салынған. Ҡайһы берҙә төҙөләсәк йорт, һарай-иҡата урынына һуйылған тауыҡ күмеп ҡалдырылған, нигеҙгә тауыҡтың ҡанын һипкәндәр. Бура күтәрелгәс, өмәселәрҙе май менән һыйлағандар, яңы өйҙөң мөйөштәренә май һөрткәндәр.

Өй һылау өсөн балсыҡ әҙерләгәндә ваҡыты-ваҡыты менән, балсыҡ ҡоро, һылап булмай, тип ҡысҡырғандар. Йорт хужабикәһе уларға буҙа, ҡымыҙ, бал сығарырға, йәки сәйгә туҡтап алырға саҡырырға тейеш булған.

Өй төҙөлөп бөткәс, унда иң тәүҙә он йәки икмәк-тоҙ индерәләр.

*Бисмиллаһир-рахманир-рахим,*
*Шатлыҡлы булһын,*
*Эсе тулы аш-һыу булһын,*
*Бала-саға зар-зыя ҡылһын!* - тип теләк теләнгән. Ошо уҡ маҡсат менән өйгә тәүҙә бер биҙрә һыу индерелгән. Яңы өйҙәге мейестә иң тәүҙә ҡоймаҡ ҡойорға тейеш булғандар. Өй ҡотлау йолаһына ит бешерелгән, унда мулланы, аҡһаҡалдарҙы, өмәселәрҙе саҡырғандар, яңы өйгә бер кем дә буш ҡул менән килмәгән.

Далалы райондарҙа йәшәүселәр яҙын өйҙө һылап, йыуып-таҙартҡандан һуң ҡалған балсыҡтан йомро шарҙар эшләп, тәрилкәгә һалып, өй һайын йөрөп, хужаларҙа изге теләктәр теләп биргәндәр. Был бүләккә алған кеше өмәселәргә икмәк, ҡорот, ҡымыҙ, май, башҡа ризыҡтар биргән, уны һуңынан күмәкләп ашағандар.

# АУЛАҠ

**Ҡыҙ-ҡырҡын араһында кис ултырыу, аулаҡтар киң таралған. Улар эш эшләүҙән бигерәк, үҙ-ара аралашыу, һөйләшеп ултырыу өсөн ойошторолған. Аулаҡҡа йәштәр ҙа, өлкән әбейҙәр ҙә килә алған. Унда мотлаҡ табын да ҡоролған.**

Ҡайһы бер районларҙа һәр кем өйөнән алып килгән ярмаларҙан бутҡа бешергәндәр, ул урнаш тип аталған. Ата-әсәләренән рөхсәт алып, ҡыҙҙар аулаҡта ҡуна ла ҡалған. Аулаҡҡа егет-елән дә килгеләгән, шулай ҙа был күренеш тыйылған булған. Егеттәр үҙҙәре ойошторған аулаҡ егет өй тип аталған. Унда берәүһенең әсәһе табын әҙерләп, йәштәрҙең үҙҙәрен генә ҡалдырған, йәки егеттәр күмәкләп ашарға бешергән. Был табындарҙа ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡымыҙ булһа ла, йәштәр бер ваҡытта ла әхлаҡ нормаларынан ситкә сыҡмаған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАЛАРЫБЫҘ БЕҘҘЕ ҠАБАТЛАЙ



## Атаһынан күреп...

**Ата-әсәһенә ике тамсы һыу һымаҡ оҡшаш балалар була. Ҡайһы саҡта теге йәки был баланы күрәһең дә, был - Фәләновтар яғына тартҡан, могайын, шуның малайылыр (ҡыҙылыр), тип уйлап ҡуяһың. Киреһенсә, балаларына оҡшатып, атаһын йәки әсәһен танығаң осраҡтар ҙа булғылай.**

Яңырaҡ бер спорт сараһында волейбол уйнайбыҙ. Командабыҙға һуңлап ҡына килеп ҡушылған таныш түгел бер ағайҙың йөҙө Урал исемле минең күптәнге таныш егеттең йөҙөн хәтерләтеүенә иғтибар иттем. Ағайҙың үҙенән: "Һеҙ Уралдың атаһы түгелме?" - тип һорарға уңайһыҙланып, уға һиҙҙермәй генә командалаш егеттәрҙең береһенән һорай ҡуйҙым. Ысынлап та, фаразым дөрөҫ булып сыҡты. Шулай итеп, ғүмерҙә лә күрмәгән, белмәгән ағайҙы, улына оҡшатып, танының да ҡуйҙым.

Быныһы - тышҡы оҡшашлыҡ тураһында. Әммә иң ныҡ аптыратҡаны шул: ҡайһы саҡта тышҡы оҡшашлыҡ ул тиклем айырым-асыҡ күренмәһә лә, эске оҡшашлыҡ - характер, ҡылыҡтар берлеге үҙен тағы ла нығыраҡ һиҙҙерә һәм һине хайран итә. Ә инде бер ғаиләгә генә хас үҙенсәлекле һәләт айырыуса һоҡландыра...

Яңырaҡ ауылда үткән бер концертта үҙешмәкәр йырсылар, бейеүселәр сығыш яһағанда, 4-5 йәштәрҙәге Байрас исемле бер малайҙың өҙҙөрөп, көйгә тап килтерә баҫып, өлкәндәр һымаҡ бейеп китеүен күреп, хайран ҡалғайны. Янымдағы бер инәй: "Ай-һай, "Байыҡ"та бейерлек егет бит был! Нурмөхәмәтовтар тоҡомо булырға тейеш, Әскәт һымаҡ, оҫта бейей", - тип, маҡтап ултырғайны. Концерт бөткәс асыҡланыуынса, ысынлап та, малайҙы олатаһы - оҫта бейеүсе Әскәт ағай Нурмөхәмәтов өйрәткән икән. Шулай итеп, "Харисов" тип таныштырһалар ҙа, егет Нурмөхәмәтовтарҙын ҡыҙының улы булып сыҡты...

## Әсәһенән күреп...

**"Байыҡ" бейеү конкурсында тәүге урындар яулаусы Әбйәлил районы Салауат ауылы ҡыҙы Руфина Хафизова ла "әсәһенән күреп тун бескән" ҡыҙыҡай булып сыҡты. Әйткәндәй, ҡыҙыҡай 9 айлыҡ ҡына сағынан бәүелсәгендә бейеп торған икән. Был хаҡта уның әсәһе Рәйлә Сөләймән ҡыҙы һөйләне. Матур милли кейем кейгән һөйкөмлө ҡыҙыҡайҙың әсәһе көйләгән көйгә тыпырҙатып йөрөүен күргәндән һуң, Руфинаға өндәшмәй ҡала алманым:**

- Руфина, әле һин ниндәй бейеү бейейһең ул?
- Әле мин "Урманда" бейеүен башҡарҙым. Уның эстәлеге буйынса, мин еләк йыйыр өсөн урманға барам да, ҡоштар тауышын тыңлайым, ағастарға, хуш еҫле үләндәргә һоҡланып, аҡлан ҡыҙырам, түмәр өҫтөнә баҫып, тыпырҙатып бейеп төшәм, унан бер бөртөк кенә еләк табып, ашап ҡуям. Еләкһеҙ ҡайтһам да, бер ҙә аптырамайым - йылмайып, көлөп, ҡыуанып ҡайтып инәм өйгә...
- Бейергә кем өйрәтте? Тағы ниндәй бейеүҙәр беләһең?
- Әсәйем инде. Ул миңә тағы "Ҡыңғырау сәскә" бейеүен, бынан тыш, иптәш ҡыҙҙарым менән бергә бейей торған "Гөлнәзирә", "Кейеҙ" бейеүҙәрен дә өйрәтте. Әсәйем мәктәптә географиянан уҡыта, "Салауат" бейеү ансамблендә бейеүгә өйрәтә.
- Һай, афарин! Киләсәктә кем булырға теләйһең?
- Президент...

Артабан бейеүсе ҡыҙҙың әсәһе Рәйлә Сөләймән ҡыҙы менән әңгәмәне дауам иттек. Уның һөйләгәндәренән ғаиләлә тәрбиә мәсьәләһе нисек ҡуйылыуы тураһында белдек.

-Балаларыбыҙҙы үҙ өлгөбөҙҙә тәрбиәләйбеҙ: һин тегеләй ит, былай ит, тип әйтмәйбеҙ, ә барыһын да үҙебеҙ эшләп күрһәтәбеҙ, йәғни ата-әсәнең һәр аҙымы, һәр хәрәкәте, һәр һүҙе бала күңелендә көҙгө кеүек сағыла икәнен аңлап, үҙ-үҙебеҙҙе һәр ваҡыт бер самала тоторға тырышабыҙ,- тип һөйләп китте Рәйлә апай. - Улдарыбыҙ Азамат, Салауат юғары уҡыу йортон тамамланы. Ҡыҙыбыҙ бәләкәй әле, ләкин уны ла эшкә күнектерәбеҙ - хеҙмәт менән тәрбиәләйбеҙ. Тағы, балаларыбыҙ туған телдәрендә матур итеп һөйләшһендәр, башҡорт рухлы булып үҫһендәр, тип тырышабыҙ. Башҡорт бейеүҙәре лә ошо маҡсатҡа хеҙмәт итә, тип уйлап, бәләкәсемде үҙем һымаҡ бейеүсе итергә булдым. Бәлки, киләсәктә бейеүсе лә булмаҫ, әммә был һәләтте үҫтермәй ҡалдырыу гонаһ булыр ине...

Рәйлә Сөләймән ҡыҙының һүҙен ғаилә башлығы Рәүеф Ғәбдрәшит улы: "Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ, яңы бейергә төшкән!" - тип йөпләп ҡуйҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Мәшәҡәтле, сыр-сыулы, шау-шыулы донъяла ошондай матур ғаиләләр бар икән, тимәк, тормош дауам итә! Киләсәктә лә тыуып торһон ата-әсәнең йөҙөн, күңелен, холҡон, талантын ҡабатлаған балалар. Тик был өлгө, был оҡшашлыҡ күркәм, матур булһын!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# ЮЛДАР СОҠОРЛО,

## әммә һүгенеү... тыйылды



**Апайымдың ейәне бигерәк телдәр. Уны тыңлаусы булһа, шыттырып та ебәрә. Әммә уның аштырып-шаштырып һөйләүе кескәйҙәрҙең ябай алдашыуынан ныҡ ҡына айырыла. Унда асыҡтан-асыҡ сабыйҙың үҙен, яҡындарын ҡурсаларға теләгәнен тойорға мөмкин. Үҙе бигерәк техника йәнле. Дүрт кенә йәш булһа ла, автомобилдәрҙең марҡаһын белеп, һәр береһенә үҙенсә баһа бирергә һәләтле ул.**

Шулай бер көндө машина менән уйнап ултыра икән. Өләсәһе ейәненең ваҡыты-ваҡыты менән һүгенеп ебәреүенә иғтибар итә.
- Ни эшләп, улым, һүгенәһең ул? - ти икән ейәненә.
- Соҡор бит... - тип яуап бирә сабый.
- Һин, улым, соҡорҙо урап үт, һәйбәт водителдәр уны урап үтә, машиналары ла имен була, яман һүҙҙе лә әйтмәйҙәр, - тигәс, ейәне ысынлап та һүгенеүҙән туҡтай - машинаһы менән алдында осраған "соҡор"ҙарҙы урап үтә башлай.

...Билдәле булыуынса, 1 июлдән һүгенеүҙе тыйыу тураһындағы ҡанун үҙ көсөнә инде. Яңы закон буйынса, әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланған өсөн штраф түләүҙәре индерелде. Граждандар өсөн - 2000-2500 һумға тиклем, вазифалы кешеләргә - 4000-5000 һумға тиклем, юридик шәхестәргә 40 меңдән 50 мең һумға тиклем санкциялар ҡаралған. Язаға тарттырылғандан һуң да һүгенһәң, штрафты арттырып түләйәсәкһең. Хатта ки алты айға тиклем эшендән бушатылыуың да ихтимал. Яңы закон буйынса, әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланыу киң мәғлүмәт сараларында, кинофильмдарҙа, спектаклдәрҙә, китаптарҙа, йырҙа һәм сәнғәттең башҡа төрҙәрендә тыйыла. Һүгенеү һүҙҙәре яңғыраған фильмдарға прокат таныҡлыҡтары бирелмәйәсәк, әҙәпһеҙ лексика ҡулланған спектаклдәргә штраф һалынасаҡ. Шулай уҡ закон баҫма продукцияларға ла ҡағыла. Мәҫәлән, һүгенеү һүҙҙәре ҡулланған авторҙың китабы махсус төргәктә генә сығарыласаҡ һәм унда "Әҙәпһеҙ һүҙҙәр бар" тигән яҙыу йөбештереләсәк.

Ғөмүмән, һүгенгән өсөн яза билдәләнмәһә лә, был тыйыу йәмғиәттә һәр ваҡыт йәшәне. Дини ҡанундар буйынса ла әҙәпһеҙ һүҙ әйтеү, һүгенеү ҙур гонаһтарҙан һанала. Әммә бының менән генә һүгенеүселәр кәмемәне. Йә сәйәсмәндәрҙе, йә эшен, йә яҡынын, йә урҙә әйтеп кителгән сабый кеүек, Рәсәй юлдарын һәм башҡа күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы әрләмәгән, әрен һүгенеү һүҙе менән ныҒытып ҡуймаған кеше бик һирәктер. Шулай булмаһа, һүгенеүҙе тыйыу тураһында закон сығарылғас, "Беҙҙең һүҙ азатлығыбыҙҙы, иркебеҙҙе ҡыҫалар" тип һөйләнеүселәр булмаҫ ине.

...Шулай ҙа юлдарҙы тейешенсә ремонтларға кәрәктер. Соҡор-саҡырҙан үткәндә янылыш һүгенеп, штраф түләүҙән ҡурҡыуҙан әйтмәйем. Ә балаларыбыҙ алдында әҙәпһеҙ һүҙ әйтеүҙән шөбһәләнеп әйтәм.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*✓ 1925 йылда "Башҡорт аймағы" журналында С. Мирасов XIII-XIV быуаттарҙа, башҡорттарҙың һаны ете миллионға тиң булған, ә Рус дәүләтенә ҡушылғанда 3 миллионға тиклем кәмегән, тигән фекерҙе әйтә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Урта быуаттарҙа башҡорттарҙың һаны күпме булған? Улар ниндәй ерҙәрҙә йәшәгән? Ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең, башҡорттар аҙ һанлы милләт булған, тигән ҡараштары, ә икенселәренең халыҡтың тарихын бер нисә быуат менән генә сикләргә тырышыуҙары дөрөҫлөккә тап киләме? Ҡыҙыҡ, шул уҡ ваҡытта тарих фәне өсөн ҡатмарлы һорауҙарға яуапты тарих фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты доценты Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ менән бергәләп эҙләйбеҙ.**

# УРТА БЫУАТТАРҘА БАШҠОРТТАР ҺАНЫ



## Тарихи сығанаҡтар ни һөйләй?

Урта быуаттарҙа йәшәгән халыҡтарҙың иҫәбен асыҡлау бөгөнгө көн фәне өсөн күп ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Был хәл башҡорттарҙың ғына түгел, башҡа халыҡтарҙың иҫәбен асыҡларға тырышҡанда ла күҙәтелә. Төп сәбәп, һис шикһеҙ, аныҡ факттар, дәлилдәр менән нығытылған сығанаҡтарҙың булмауы, йәки уларҙың аҙ булыуына ҡайтып ҡала. Әлбиттә, быға гәжәпләнәһе түгел, ни тиһәң дә, беҙҙең дәүләт тарихында тәүге тапҡыр халыҡ иҫәбен алыу кампаниялары монголдар хакимлыҡ иткән осорҙа ойошторола. Ләкин ошо тураһындағы тарихи факт билдәле булһа ла, үкенескә күрә, ул кампанияларҙың һөҙөмтәләре бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланмаған. Шуға күрә башҡорттарҙың да үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылған осорға тиклем күпме булыуы хаҡында бер ниндәй ҙә аныҡ, асыҡ, раҫланған мәғлүмәт юҡ тиерлек. Булғандары ла бер-береһенә ҡаршы килә. Шуға күрә, башҡорттарҙың һаны бер нисә меңдән алып бер нисә миллионға тиклемге сиктә тирбәлә.

1925 йылда "Башҡорт аймағы" журналында "Башҡорттарҙың һаны" исеме аҫтында сыҡҡан мәҡәләһендә С. Мирасов XIII-XIV быуаттарҙа, йәғни Алтын Урҙа осоро ваҡытында, башҡорттарҙың һаны ете миллионға тиң булған, ә Рус дәүләтенә ҡушылғанда 3 миллионға тиклем кәмегән, тигән фекерҙе әйтә. Үкенескә ҡаршы, был һандарҙың ниндәй сығанаҡтарҙан алыныуы билдәле түгел. С. Мирасов нигеҙләнгән ниндәйҙер хеҙмәт мотлаҡ булғандыр инде ул. Ләкин бындай факттар бөгөнгө тикшеренеүселәр тарафынан инҡар ителә, күп ғалимдар, Урта быуаттарҙа йәшәгән башҡорттар аҙ һанлы халыҡ булған, тигән ҡарашты яҡлай һәм тикшеренеүҙәрен ошо юҫыҡта алып бара. Эйе, революцияға тиклемге осорҙа һәм Советтар Союзы ваҡытында айырым авторҙар үҙҙәре юлыҡҡан ҡайһы бер сығанаҡтарҙы дөрөҫ тәржемә итмәйенсә, йәки уларҙың эстәлегенә төшөнмәйенсә, Урта быуат башҡорттарының һанын 2 мең кеше менән генә сикләне. Үкенескә күрә, был ҡарашты бөгөнгө көндәге ҡайһы бер авторҙар ҙа хуплай. Кемдәрҙәлер шулай ҡулайлы, күрәһең...

Урта быуат башҡорттары аҙ һанлы халыҡ булған тигән ҡараш күпмегә дөрөҫкә тап килә? Уның нигеҙендә ниндәй дәлилдәр ята? Әлбиттә, бөгөнгә һылтанған сығанағының исеме булмағас, Мирасовтың ҡарашын ҡабул итеүе енел түгел. Әммә шул уҡ ваҡытта ҙур территорияларҙа йәшәгән башҡорттарҙың аҙ һанлы булыуы хаҡындағы ҡараш менән дә килешеп булмай һәм ошо тезис үҙе уҡ күп һорауҙар тыуҙыра. Етмәһә, башҡорттарҙың һаны аҙ булыуы тураһындағы сығанаҡтар ҙа билдәле түгел. Ашығыс һығымталар яһамайынса, ошо һорауға яуап биреп ҡараясаҡбыҙ.

Беренсенән, ғәрәп һәм фарсы авторҙары билдәләүенсә, Урта быуаттарҙа башҡорттар бик ҙур территорияларҙа йәшәгән. Уларҙың ерҙәре Көнсығыш Европанан Азия ҡитғаһына, Тоболдан Волгаға, бөгөнгө Пермь крайынан Каспий, Арал диңгеҙенә тиклемге дала-тауҙарға һуҙылған. Бынан тыш, башҡорттарҙың айырым бер төркөмө, бөрйәндәр, Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ далаларында, бөгөнгө Украина ерҙәрендә лә йәшәгәне билдәле. Был турала мәғлүмәтте Иҙриси, Әл-Балхи яҙмаларында табырға була.

Икенсенән, Башҡорт иле һәм халҡы, уларҙың тораҡ пункттары, шулай уҡ ҡалғаләре бик күп Урта быуат сығанаҡтарында, Көнсығыш, Үҙәк, хатта Көнбайыш Европа карталарында киң сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, "Әл-Башҡорт иле" атамаһы Сәләм Тәржүмәндең (IX быуат), Ибн Хордадбәхтең (IX б.), Ибн Фаҙландың (IX б.); "башҡорттарҙың Маср һәм Каср ҡалалары" - Әл-Иҙрисиның (XII б.), "Башҡорт тауы" - Әл-Бируни менән Әл-Бәкүиның карта-яҙмаларында осрай, сағылыш таба. XI быуат ғалимы Мәхмүт Ҡашғари "башҡорт теле бөгөнгө көндәге эре 20 төрки телдәре иҫәбендә..." тип яҙа.

Шулай уҡ Ипатьев йылъяҙмаһынан, 1151 йылда Башҡорт хандың, яуҙа үлгән Владимир Давыдович Черниговский исемле кенәздең тол ҡатынына өйләнеп, Рус кенәздәр тоҡомо менән туғанлашыуы, ә һуңынан 20 меңлек ғәскәре менән Черниговкенәздәренә Киев тәхетен алыу өсөн ярҙамға килеүе хаҡында уҡырға була.

XIII быуатта Әл-Хәмәүи яҙмаларында "Венгрияның ҙур булмаған ҡалаһына бәрәбәр булған Әл-Башҡорт иленең 30 ҙур ауылы" хаҡында мәғлүмәттәргә юлығабыҙ.

Шулай уҡ ағалы-ҡустылы Пициганолар (1367 й.) - "Камалағы Башҡорт ҡалаһы" хаҡында, Казуини (XIII б.) "Башҡорт (Башгирд) - Константинополь менән Булғар араһында йәшәгән күп һанлы төрки ырыу, ҡәбилә", тигән мәғлүмәт бирә.

Ә Морат Рәмзи билдәле милләттәше Санджар Әл-Башҡорт тураһында: "Санджар Әл-Башҡорт (Башгирд) - Мәмлүк дәүләте хакимдарының береһе, Мысырҙың шағиры һәм әмире", - тип яҙа.

Өсөнсөнән, күп һанлы булған һәм шулай уҡ ҙур ғына территорияларҙа йәшәгән ҡыпсаҡтар, болғарҙар, хазарҙар көслө ассимиляцияға бирелеп, ваҡыт үтеү менән бөтөнләй юҡҡа сыҡҡанда, башҡорттар үҙҙәренең ерҙәрен, мәҙәниәтен, телен, ниндәйҙер кимәлдә үҙаллылығын һаҡлап алып ҡала алған. Монгол-татарҙарға, башҡа баҫҡынсыларға ҡаршы оҙаҡ йылдарға һуҙылған көрәштән һуң да, ниндәйҙер кимәлдә этноцид, геноцид кеүек күренештәргә дусар ителеүҙәренә ҡарамаҫтан, барыбер юҡҡа сыҡмағандар. Был шулай уҡ, халыҡ аҙ һанлы булған, тигән тезисты инҡар итә.

Ошо урында академик Раил Кузеевтың XVI быуаттағы башҡорттарҙың иҫәбенә ҡарата әйтелгән һүҙҙәрен килтереп китергә кәрәктер: "Нуғайҙар, әлбиттә, башҡорттарға ҡарағанда һан яғынан күберәк була. Әммә XVI быуат уртаһындағы ҡаты бәрелештә башҡорттарҙың уларға ҡаршы тора алыуҙарын иҫәпкә алғанда, ә һуңыраҡ Рәсәйгә ҡушылғандан һуң, Башҡортостан ерендә ҡалған нуғайҙарҙың ҡәбилә-ырыу төркөмдәрен ассимиляциялаштырыуҙары буйынса фекер йөрөткәндә, башҡорттар Башҡортостан ерендә йәшәгән нуғайҙарға ҡарағанда күберәк була", - ти ул үҙенең хеҙмәтендә.

Дүртенсенән, боронғо башҡорт мифологияһы өлгөһө булған "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостарында сағылдырылған ҡайһы бер мотивтар, сюжеттар һәм айырым исемдәр боронғо шумерҙарҙың эпик һәм дини әҫәрҙәре менән ауаздаш, улар араһында күп кенә уртаҡ һыҙаттарҙы төҫмөрләргә була. Был башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән киң аралашып йәшәүҙәре тураһында раҫлаусы кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил.

Үрҙә һанап киткән факттарҙан сығып, Урта быуат башҡорттары аҙ һанлы булған тигән ҡараштың дөрөҫкә тап килмәүен әйтергә була. Әгәр ҙә улар аҙ һанлы булһа, нисек итеп шул тиклем киң территорияларҙа таныулы алыр ине? Ә ул замандарҙа мәғлүмәттең таралыу тиҙлеге бөгөнгө көндәгенә ҡарағанда бик күп тапҡыр кәмерәк булған бит. Тимәк, беҙ ҙур ышаныс менән башҡорттарҙың заманына күрә ҙур ғына һанлы милләт булыуы хаҡында раҫлай алабыҙ.

**Азамат АБУТАЛИПОВ яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йөрөү ысулы һәм саралары

Балалар үҙҙәре генә ултыра алмағанлыҡтан, уларҙы билбау менән әсәләренә бәйләйҙәр. Иң артта ултырған бала - алдағыһына, алда ултырғаны әсәһенә бәйләнгән билбауға тотона. Әгәр ғаиләлә балалар күп икән, күсенгәндә уларға ғаилә башлығы йәки ғаиләгә өлкән бала ла ярҙам итә. В. М. Черемшанский һүҙҙәренсә, ҡайһы берҙә әсәләр балаларҙы эйәрҙең алғы ҡашына нығытылған махсус урындыҡтарға ултырта. Эйәргә һайғауҙар нығытыла йәки бау бәйләнә һәм балалар шуна тотоноп ултыра. Йәйләүҙән күскәндә башта аттарҙы, улар артынан һарыҡтарҙы һәм эре малды ҡыуалар. Иң аҙаҡтан монаятын тейәп кешеләр күсенә.

Һауыт-һаба һәм башҡа йорт кәрәк-ярағы эйәрҙәргә эленә, ҙур әйберҙәр, һөйрәтке менән күсерелә. Һөйрәтке ябай ғына эшләнә: оҙонлоғо дүрт метрлыҡ ике һайғауҙың йыуан яғы аттың өҙәңгеһенә бәйләнә. Һөйрәтке урта тирәһенән йүкәнән йәки ялдан үрелгән бау менән нығытыла, аҫтараҡ ҡабыҡ беркетелә. Мал-мөлкәт ҡабыҡҡа тейәлеп, нығытыла. Тапалған урман юлынан йөк ташыу өсөн арбаның алғы өлөш файҙаланыла. Әйберҙәр алғы күсәргә генә йәки алғы күсәргә һәм арба тәртәләренең артҡы өлөшөнә һалынып, бәйләнә йәки алғы күсәргә нығытылған һай-



ғауҙарға тейәлә (**һүрәт**). Был һайғауҙарға, ябай һөйрәткегә һалынған кеүек ҡабыҡ һалып нығытыла. Күсәргә әйберҙәрҙе тәрән кисеүҙәрҙән сыҡҡанда һалалар.

XX быуат башында башҡорттар араһында тәгәрмәсле экипаждар - арбалар, тарантастар һ.б. күршеләре - рус милләтендәге кеүек уҡ яһалған. Ләкин уларҙың арбалары күпкә оҙон булыуы менән айырылып тора. Сөнки башҡорттар урман эше менән шөғөлләнә һәм уларға йыш ҡына ат менән бүрәнә ташырға тура килә.

Ҡышын башҡорттар ғәҙәттәге саналарҙа, терһәкле (ләжәнкәле) саналарҙа, кошевкаларҙа йөрөй.

Башҡортостандың үҙәк өлөшөндә һәм уның төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә башҡорттар ҡамыт-дуға эшләгәндә һалабаш һәм йүкә ҡулланған. Йүкәнән ыңғырсаҡ, һалабаштан ышлыя, йүгән, нуҡта үрәләр. Ҡайһы берҙә ҡамыт семәрләп биҙәлә (**һүрәт**).



Һыуҙа йөрөү өсөн башҡорттарҙың ниндәйҙер камил сараһы юҡ. Бүрәнәне соҡоп яһалған кәмә - берҙән-бер йәки иң киң таралған транспорт сараһы булып тора. Таҡтанан яһалған кәмәләр ҙә осрай, әммә уны башҡорттар башҡа милләттәрҙән һатып ала, үҙҙәрендә был шөғөл менән булышыусылар юҡ.

✓ *Ҡағиҙә ошо рәүешле үҙгәрмәгән хәлдә, беҙ лифт саҡыртһаҡ, "лифҡа" баҫып менеп йөрөр инек. Шуға күрә, киоскыла, банкыла тип, һүҙҙәрҙе үҙгәртеп яҙыуҙың да кәрәге юҡ, беҙ киоскта, банкта тип әйтә алабыҙ.*



**Туған телдә дөрөҫ һөйләшеүҙең телде һаҡлауҙа ҙур роль уйнауын инҡар итергә ярамай. Бигерәк тә журналистарҙың, яҙыусыларҙың телгә иғтибарлы булыуы шарт. Ҡасандыр бөйөк шағирыбыҙ телде тере шишмәгә тиңләһә, бөгөн беҙ был шишмәне ниндәй хәлдә тотабыҙ? Уны төрлө сүп-сар - сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән, таштарына ултырған ләмдән, йәғни телгә индерелгән кәрәкмәгән яңылыҡтарҙан, шишмә һыуының түмен ебәреүсе бүтән бысраҡтарҙан - хаталарҙан таҙартыу кәрәкме? Бигерәк тә ниндәй хаталарҙан һаҡланыу кәрәк? Ошолар тураһында тел белгесе, педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Исмәғил улы ХАЖИН менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ТЕЛМӘРЕҢӘ

## тере шишмәне

### "Аҡһаҡ" баҫымдар, "зәғиф" интонация

Йәмғиәттең телен баҫмалар, радио һәм телевидение формалаштыра. Халыҡ ташҡа баҫылғанға, яңғырап торған һүҙгә айырыуса ныҡ ышана. Шуға күрә, журналистар үҙҙәре еткергән мәғлүмәт өсөн генә түгел, яҙған һәм һөйләгән һүҙе өсөн дә яуаплы. Хаталы һөйләгәнде көн дә тыңлап, ишетә йөрөгән кеше уларҙы үҙе лә ҡабатлай башлай. Был йәһәттән һүҙҙәргә дөрөҫ баҫым ҡуйыу мәсьәләһенә иғтибар итергә кәрәк. Йыш ҡына баҫымды кәрәк булмаған урынға ҡуйып һөйләүҙәрен ишетергә тура килә. Быны раҫлаусы миҫал: -*маҫ*, -*мәҫ* ялғауҙары. Башҡорт теле ҡағиҙәһе буйынса, ҡылымдың юҡлыҡ формаһын белдергән -*ма*, -*мә* ялғауҙары баҫымһыҙ була. Әммә һәр ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе бар. Был осраҡта -*маҫ*, -*мәҫ* ялғауҙары һәр ваҡыт баҫымлы, йә баҫым һүҙҙең аҙағына күсә бара, тигән иҫкәрмә бирелгән. Мәсәлән, бАрма, бАрмаһындар һүҙҙәрендә баҫым -ма ялғауы алдынан торған ижеккә, ә бармАҫ, бармаҫтАр һүҙендә -*маҫ* ялғауына һәм унан һуңғы ижеккә төшә. Ҡылымдың -*маҫ*, -*мәҫ* юҡлыҡ ялғауының ҡыҫҡартылған формаһы ла баҫымлы: бармАм, бармАбыҙ. Бер ҡарауға бында -*ма* ялғауы ҡушылған кеүек тойола, ләкин улар бармАҫмын, бармАҫбыҙ һүҙҙәренең ҡыҫҡартылған формаһы. "Ысын ир егет отОлмаҫ", - тигәндә отолмАҫ тип әйтеү дөрөҫ була. Баҫымды дөрөҫ ҡуя белмәү башҡорт теленә ҙур зыян килтермәй, уны яйлап төҙәтергә мөмкин.

Ә бына һүҙҙәрҙе, интонацияны, өндәрҙе үҙгәртеүҙең хәүефе ҙурыраҡ. Башҡорт теленең интонация үҙенсәлектәренә иғтибар итһәк, тәү сиратта дөрөҫ һөйләшеүсе Баймаҡ, Әбйәлил һәм Белорет райондарының һөйләштәрен миҫал итеп килтерергә мөмкин. Улар береһе лә: *"Боаймаҡҡа ҡоайтып киләм"*, - тип һөйләмәй. Ауылда шул тиклем дөрөҫ һөйләшәләр, кәрәк урында тауышты күтәрәләр, йә төшөрәләр. Бөрйән, Белорет районарының төпкөл ауылдарында "Юлдаш" радиоканалы алып барыусыларының телмәрен аңлап етмәйҙәр, уның ҡарауы, Татарстанда аңлайҙар. Сөнки журналистарҙың бөтөн интонациялары, өндәре татар теленекенә яҡын. Башҡорт интонацияһы Ҡаҙандыҡынан айырыла, беҙ уларға эйәрергә тейеш түгелбеҙ. Беҙ бит әле *"а"*-ны *"а"* тип әйтәбеҙ, *"оа"* тимәйбеҙ. *"Ҡоалаҡ"*, *"боармаҡ"* тимәйбеҙ, *"ҡалаҡ"*, *"бармаҡ"* тип һөйләшәбеҙ. Бына шуның кеүек әйберҙәр телебеҙҙең бәҫен төшөрә. Ә тел йәшәһен өсөн уның үҙенсәлектәре һаҡланырға тейеш.

Бөгөн башҡорт радиоһы һәм телевидениеһында эшләүсе егет-ҡыҙҙар туған телдәрендә һөйләшергә өйрәнеп килә килеүгә. Бынан 10-15 йыл элек башҡортса тура эфирҙа, йәнле һөйләш менән тапшырыу алып барыусылар һирәк ине, хәҙер улар бар. Уларҙы бер телдә генә һөйләшеүсе урыҫ журналистары менән сағыштырып булмай, ярамай ҙа. Шуға күрә, ошондай тура эфирҙар ваҡытында ебәрелгән хаталар өсөн журналистарыбыҙҙы битәрләргә кәрәкмәй, ундай ғына яңылышлыҡтар китә, тип уйлайым. Бының ҙур зыянын да күрмәйем, был тыңлап ҡына торһондар, күберәк һөйләһендәр әйҙә. Һабантуй тураһында мәғлүмәт биреүсе бер ҡыҙҙың, мәсәлән, "*һырғауыл*" урынына яңылыш "*һырғалаҡҡа менделәр*" тип ысҡындырыуы ҡолаҡҡа ятышһыҙ хәбәр булһа ла, тәнҡитле иҫкәрмә яһамай торорға мөмкин. Ләкин хата система рәүешен алһа, уны иғтибарһыҙ ҡалдырып булмай. Бигерәк тә ғәрәп теленән ингән "*тәьмин*", "*мәсьәлә*" кеүек һүҙҙәрҙең тамаҡ төбө менән әйтелмәүе ауыр ҡабул ителә. Хәмзә, русса "*кнаклаут*" тип аталған был өн башҡорт телендә ымлыҡтарҙа, балалар телмәрендә генә осрай.

Мәсәлән, бармаҡҡа энә менән сәнсһәк, "*ә'эмм*" тип әйтәбеҙ. Беҙҙең телдә хәмзә фонематик әһәмиәткә эйә түгел. Ләкин шуның кеүек өндәр башҡорт телендә бар (мәсәлән, ирҙәр ат туҡтатҡан ваҡытта ике ирендәрен дә вибрация менән "*тпру*", тип әйтә). Уларҙың дөрөҫ әйтелеше ҡағиҙәләрҙә күрһәтелмәһә лә, бәләкәйҙән әйтеп өйрәнгәс, ғәмәлдә, һорау тыуҙырмаҫҡа тейеш.

### Телдәр араһындағы сиктәр

Юғарыла әйтелгән хаталарҙы төҙәтергә, кешеләрҙе дөрөҫ интонация ҡуйып һөйләшергә өйрәтергә мөмкин. Ә бына ҡылым формаларында хата ебәреү башҡорт һүҙҙәрен үҙгәртеп ебәреүе менән үтә зыянлы. Мәсәлән, билдәле йырсы ҡыҙ башҡарыуындағы "Бала саҡҡа ҡайтыр инем" тигән йырҙа ул "*әсәйем һөйөр ине*", тип әйтер урынға, *"әсәйем һөйәр ине"*, "*тийәр ине*" тип йырлай. Тағы ла *"һеҙ икәнһеҙ донъя көҙгөһө"* тип йырлайҙар. Башҡорт телендә "*икәнһеҙ*" тигән һүҙ формаһы юҡ. Татар телендә "*икәнсез*" тип әйтәләр, ләкин *"с"* өнөн *"һ"* өнөнә генә алмаштырыуҙан башҡорт һүҙе яһалмай. Килеп сыҡмай икән, саҡ ҡына үҙгәртеп ебәрергә һәм *"һеҙ икән дә"* тип йырларға мөмкин. Салауат Фәтхетдиновтың Зөһрә Ҡотлогилдина һүҙҙәренә ижад ителгән *"Белгең килһә"* йырын татар теленә нисек яраҡлаштырып йырлауына иғтибар итәйек. Татар телендә *"белгең килһә"* тигән форма ҡулланмайҙар, улар *"беләсең килсә"* тип һөйләшә. Улай тиһәң, йырҙа ижек һаны тура килмәй. Шуға күрә, Салауат Фәтхетдинов *"беләм тиһәң"* тип үҙгәртеп йырлай. Беҙҙең йырсылар бына ошондай һүҙ нескәлектәренә һаҡ түгел. *"С"* өнөн *"һ"* өнөнә алмаштыралар ҙа, башҡортсаға тәржемәһе шул була, тип уйлайҙар.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә грамматика ныҡ ярлыланды. Грамматика, лексика менән бер рәттән, телдең үҙенсәлеген билдәләүсе төп факторҙарҙың береһе. Сөнки бер телдең грамматикаһы бер ҡасан да икенсе телдең грамматикаһына тулыһынса оҡшамаясаҡ. Шуға күрә, мин грамматиканы ғына уҡытыуға ҡаршы булһам да, уны һаҡлау яҡлымын. Башҡорт теленең грамматикаһына иғтибарлы булырға, *"төшӘр"*, *"килӘр"* тип һөйләмәҫкә, үҙебеҙсә *"төшӨр"*, *"килЕр"* тип һөйләшергә кәрәк.

Башҡорт теленә тәржемә ителгән күп кенә һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы һорау тыуҙыра. Мәсәлән, "*уфимцы*" һүҙен башҡортса *"өфөләләр"* тип тә яҙғандары булды. Дөрөҫө *"Өфө кешеһе"* рәүешендә алынырға тейеш, тип уйлайым. Ауыл халҡы шулай һөйләшә, уларға: *"илмәшлеләр концерт менән килгән"*, тиһәк, тәгәрәп ятып көләр. Сөнки *"илмәшлеләр"*, *"өфөләләр"* - беҙҙең вариант түгел. Урыҫтарҙа бындай форма бар, әммә иғтибар итһәгеҙ, улар ҙа төрлөсә әйтә: Мәскәү кешеһе - москвич, Өфө кешеһе - уфимец, Нижний Новгородтан - нижегородец, Архангельскиҙан - архангелогородец, Туланан - туляк. Шуға күрә, башҡортса ла Баймаҡ кешеһе, Өфө кешеһе, өфөләр, илмәштәр йә Илмәш кешеһе тип төрлөсә әйтеүҙән ҡурҡырға ярамай. Әммә *"өфөлө"* тип әйтеү яңылыш, ул саҡта Баҡалы, Ҡырмыҫҡалы кешеһе нисек була? Баҡалылылар, ҡырмыҫҡалылылар килеп сығамы? Башҡорт телендә -*лы*, -*ле* ялғауҙары ер-һыу атамаһына бәйләп, кеше ҡайҙа йәшәгәнен белдереп килмәй. Татар телендә ул нормаға ингән, ләкин беҙгә уларға эйәрергә кәрәкмәй, тип уйлайым.

### Сит тел һүҙҙәрендәге ялғау

Ғөмүмән, башҡорт һүҙҙәренең дөрөҫ яҙылышы, ғәҙәттә, артыҡ ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Диктант яҙғанда ла мәктәп уҡыусылары йышыраҡ сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә генә хата ебәрә. Мәсәлән, банк, танк, космонавт кеүек һүҙҙәргә дөрөҫ ялғау ҡушыу һорау тыуҙыра. Бынан 80-90 йылдар элек башҡорт телендә ике тартынҡы йәнәш килгән ваҡытта һуҙынҡы өн ҡушып яҙыу ҡағиҙәһе ҡабул ителгән. Яңыса дәреслектәр төҙөгәндә шулар араһынан нишләптер -*нк*, -*нг* менән бөткән һүҙҙәрҙе генә һайлап алғандар. Продуктылар, очеркылар тип яҙмайбыҙ, продукттар, очерктар тип яҙабыҙ бит. Шуға ла банкылар, танкылар тип яҙыуҙы дөрөҫ тип һанайым. Мин был -*нк*, -*нг* менән тамамланған һүҙҙәргә лә һуҙынҡы ҡушып яҙмау яғында, шулай дөрөҫөрәк булыр ине. Ярай әле яңғыҙлыҡ исемдәренә ялғау ҡушҡанда был ҡағиҙә ҡулланылмай. Юҡһа, ҡала исемдәрен яҙғанда буталсыҡтар күп булыр ине. Һуңғы йылдарҙа һәр яҡлап бәйләнештәр ныҡ ығына барған Ҡытайҙағы ҡалаларҙың күбеһе -*нг* өнө менән тамамлана. Гонконгыламы, әллә Гонконгтамы? Әлбиттә, икенсе варианты дөрөҫ була. Сит илдәрҙән ингән яңғыҙлыҡ исемдәргә һуҙынҡы ҡушылмаһа ла (Дамаск - Дамаскта), рус теленән ингән атамаларға -*и* өнөн ҡушырға тейешбеҙ: Омск - Омскиҙа, Магнитогорск - Магнитогорскиҙа. Дамаскта тип әйтеп булғас, бәлки, Омскта тип тә әйтеп булалыр? Башҡортостанда -*ск* менән тамамланған ҡалалар юҡ, уларҙың атамалары башҡортса икенсе төрлө яңғырай. Берҙән-бер Нефтекамск ҡалаһы бар ине, уны ла Нефтекама, тип үҙгәртә һалып ҡуйҙыҡ үҙебеҙсә.

Әйтергә кәрәк, тағы мин килешеп етмәгән бер мәсьәлә бар: һүҙ аҙағында *с, л, т* тартынҡылары икешәр килгән осраҡта, уларға ялғау ҡушҡанда береһе төшөрөп ҡалдырыла. Татар телендә улар шул килеш һаҡлана. Рус теле дәресенә барып инһәк, таҡтаға *"Классная работа"* ике "*с*" менән, башҡорт теле дәресенә инһәк *"Класта эш"* тип бер "*с*" ҡалдырып яҙып ҡуйылған. Балаларҙа ассоциация тыуа, шуға рус телендә яҙған ваҡытта бер *"с"* хәрефе яҙып, хата эшләйҙәр. Ул һүҙҙәргә бер ниндәй ҙә үҙгәртеүҙәр индермәйбеҙ икән, ул ваҡытта уға нимәлер өҫтәргә кәрәкме? Ун мең һүҙгә бер тапҡыр осрай торған металл һүҙенә тағы бер *"л"* ҡушһаң нимә була? Рус телендә лә бер үк өс өн бер юлы килгән һүҙҙәр байтаҡ: длинношеее. Класс, классы, класста тип яҙғанда ла булыр ине.

*Әйтергә кәрәк, тағы мин килешеп етмәгән бер мәсьәлә бар: һүҙ аҙағында с, л, т тартынҡылары икешәр килгән осраҡта, уларға ялғау ҡушҡанда береһе төшөрөп ҡалдырыла. Татар телендә улар шул килеш һаҡлана. Рус теле дәресенә барып инһәк, таҡтаға "Классная работа" ике "с" менән, башҡорт теле дәресенә инһәк "Класта эш" тип бер "с" ҡалдырып яҙып ҡуйылған. Балаларҙа ассоциация тыуа, шуға рус телендә яҙған ваҡытта бер "с" хәрефе яҙып, хата эшләйҙәр. Ул һүҙҙәргә бер ниндәй ҙә үҙгәртеүҙәр индермәйбеҙ икән, ул ваҡытта уға нимәлер өҫтәргә кәрәкме? Ун мең һүҙгә бер тапҡыр осрай торған металл һүҙенә тағы бер "л" ҡушһаң нимә була? Рус телендә лә бер үк өс өн бер юлы килгән һүҙҙәр байтаҡ: длинношеее. Класс, классы, класста тип яҙғанда ла булыр ине.*

Сит телдән ингән һүҙҙәрҙә нәҙеклек билдәһен төшөрөп ҡалдырыу кәрәк, уға ҡарата бер ниндәй ҙә ҡаршылығым юҡ. Телдең ваҡыт үтеү менән үҙгәреп барыуын -*фт*, -*вт* менән тамамланған һүҙҙәргә ялғау ҡушылғанда *"т"* хәрефен төшөрөп ҡалдырыу ҡағиҙәһе бөтөүе лә дәлилләй. Космонавты, космонавтың формаһында яҙһаҡ, хата булмай. Ҡағиҙә ошо рәүешле үҙгәрмәгән хәлдә, беҙ бейек йорттоң бишенсе ҡатына менер өсөн лифт саҡыртһаҡ, *"лифҡа"* баҫып менеп йөрөр инек. Шуға күрә, киоскыла, банкыла тип, һүҙҙәрҙе үҙгәртеп яҙыуҙың да кәрәге юҡ, беҙ киоскта, банкта тип әйтә алабыҙ, иҫкергән ҡағиҙәне үҙгәртергә булыр ине, тип иҫәпләйем.

Башҡорт телендә тағы ла ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар ҡушыу осраҡтары тураһында ҡағиҙә-

✓ ***Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының һүҙҙәр картотекаһында 70 меңгә яҡын башҡорт һүҙе бар. Быға аптырарлыҡ та түгел, мәҫәлән, йылҡы малының төҫөн белдергән һүҙҙәр генә лә борон йөҙҙән ашып киткән.***

# ИҒТИБАРЛЫ БУЛ,

## ҡыйлама



***Башҡорттар йәшәгән бөтә райондарҙа, күпселек ауылдарҙа булдым. "Миләш" тип һөйләүселәр бик һирәк, башҡорттар "мышар" һүҙен ҡуллана. Әҙәби телдә мышар тип берәү ҙә һөйләмәй. Аңлаймы, аңламаймы, миләш тиҙәр. Нимәһе менән "миләш" һүҙе яҡшы, ә "мышар" һүҙе насар? "Мышар" тип һөйләшеп үҫкән шағирҙарыбыҙ "миләш" тип шиғыр яҙа. Ҡасандыр муйылды "шоморт" тиҙәр ине, ярай әле хәҙер муйыл һүҙе әҙәби телгә кире ҡайтты. "Мышар" һүҙен дә ҡайтарырға кәрәк. Бер үк мәғәнәне аңлатҡан, инеү-кереү кеүек төрлө ҡылымдарҙың да икеһен дә ҡулланырға була. Гел генә кереү менән алмаштырырға ярамай, инеп тә китергә кәрәк ҡайһы саҡта.***

ләр бар. Мәҫәлән, меню һүҙенә ялғау ҡушылғанда *"ҙ"* өнө менән ҡушыла: менюҙы, менюҙа. Әммә интервью - интервьюны, какаду - какадуны. Был ҡағиҙә башҡорт телендә *"у"* хәрефе *"тау"* һүҙендә кеүек тартынҡы өндө, йәки "какаду"ла һымаҡ һуҙынҡы өндө белдереп килә алыуы менән бәйле. Ғөмүмән, һүҙҙәр *и, й, ю, у* хәрефтәренә тамамланған осраҡта *"ҙ"* менән башланған ялғау ҡабул итә, ҡалғандарына *"н"* хәрефенә башланған ялғауҙар ҡушыла. Вәлидиҙе, Зәкиҙе тип яҙһаҡ, дөрөҫ була. Башҡорт теленең үҙенсәлеген һаҡлау йәһәтенән - *ҙ* өнөн ҡулланыу дөрөҫ, *-ҙ* өнө - Рәсәй дәүләте территорияһында йәшәүсе бүтән бер милли телдә лә юҡ.

Ғөмүмән, туған телебеҙҙең үҙенсәлектәрен һаҡлап ҡалыу өсөн *"ҙ", "һ", "ҫ"* өндәрен юғалтырға ярамай. Хатта Николай Дмитриев был турала: "Башҡорттар *"ҙ"* өнөн шул тиклем ныҡ ҡәҙерләй. Шул *"ҙ"* өнө башҡорт һәм татар телдәре сиген билдәләй", - тип яҙған. Әгәр ҙә татар менән башҡорттоң сиген *"ҙ"* өнө билдәләй икән, ул саҡта Аҡтаныш, Миңзәлә *"ҙ"* менән һөйләшә, илештәр, баҡалылар тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Улар хатта беҙҙән арттырып ебәреп *"Ҙариф", "ҙавод"* тип һөйләшә. Әгәр ҙә унда борон-борондан татарҙар йәшәгән булһа, ундағы бер районҙың исеме *"Атнаҡай"* булыр ине, ә ул *"Аҙнаҡай"*. Ошо *"ҙ"* өнө кеүек "*һ*" өнө лә башҡорттар өсөн бик әһәмиәтле, башҡа бер телдә лә был өн юҡ, һәр хәлдә, һүҙ башында килмәй. Татар телендә *"һ"* өнө тик ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәрҙә генә осрай: шәһәр, һәм, һаман. Улар был һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтеп тә еткерә алмай, *"хәм", "хаман", "шәхәр"* тип һөйләйҙәр...

### Телебеҙҙең үҙенсәлеге - модаллектә

Башҡорт теленең төп үҙенсәлеге - ул модаллек. Йәғни, һөйләүсе үҙе һөйләгән ваҡиғаға ҡарата мөнәсәбәтен һүҙ формаһы аша белдерә. *"Килеп йөрөй"* тиһәк, был хәлгә ыңғай ҡараш та булыуыбыҙ аңлашылып тора. *"Килгеләй"* тип әйтәбеҙ икән, унда саҡ ҡына булһа ла кире мөнәсәбәт һиҙелә. Бәлки, һирәк кенә килеп йөрөүен оҡшатмайбыҙҙыр, уның йышыраҡ килеүе кәрәктер, йәки бөтөнләй килеүен теләмәйбеҙҙер. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Һүҙ формаһы менән генә беҙ шул эшкә, кешегә һ.б. мөнәсәбәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Бына ошо мөнәсәбәтте белдереүсе һүҙ формалары модаллек була инде. Модаллек ваҡытында интонация үҙгәрә, ҡайһы берҙә *-мә, -ма* ялғауҙарына ла баҫым төшә: кИтмә, ә үтенеп һорағанда - китмӘ. Мин БДПУ-ла эшләгәндә, студенттар менән "йыу" һүҙенең 36 мең һүҙ формаһын таптыҡ та, артабан эҙләп тә торманыҡ. Ул формаларҙы башҡорт телен белгән оло кеше аңлай, йәштәр аңламаҫҡа ла мөмкин. Ә яҙыусылар шул 36 меңдең бер өс йөҙөн үҙ әҫәрендә ҡулланамы, юҡмы...

Башҡорт теле дөйөм халыҡ-ара аралашыу теле булмағанлыҡтан, бөгөнгө көндә бына шул формалар телебеҙҙән юғала бара. Беҙ башҡорт телендә бәләкәй генә мәғлүмәттәр биреү-алыуға өйрәтеү юлына баҫтыҡ. Балаларыбыҙ *"ашай", "эсә"* тигән һүҙҙәрҙе белһә етә, тип уйлайбыҙ. Ошо һүҙҙәрҙең дә нисә төрлө формаһы булыуына иғтибар ҙа итмәйбеҙ. Мәктәптә грамматик теорияны уҡытып, балаларҙы башҡорт теленән биҙҙереп бөттөк. Телдең модаллеге, һүҙ формаларының төрлөлөгө мәктәптә грамматик теория рәүешендә уҡытылырға тейеш түгел. Баланың аңына ул әҙәбиәт, баҫма матбуғат, һөйләшеү аша һалына.

Ҡылымдың шаһитһыҙ һәм шаһитлы формаларын да йыш ҡына бутайҙар. Бигерәк тә дин әһелдәре телмәрендә шаһитһыҙ форманы ҡулланғандарын белмәйем. Улар тота ла: *"Мөхәммәт бәйғәмбәр әйтте"*,- тип һөйләй башлай. Үҙҙәре күреп, ишетеп торғанмы ни? Башҡорт теле законы буйынса *"әйткән"*, *"барған"* булырға тейеш. Әгәр ҙә һин дини тәғлимәтте башҡорт телендә алып бараһың икән, уны башҡорт теленең законына ярашлы алып барырға тейешһең. *"Бәйғәмбәр әйткән"*, *"Хоҙай Тәғәлә күрһәткән"* булырға тейеш, сөнки беҙ уны күреп тормағанбыҙ. Башҡорт теленең үҙенең законы бар, ана шулай боҙалар беҙҙең телде. *"Әйтте"* тиһәң дә, *"әйткән"* тиһәң дә һөйләмдең мәғәнәһе үҙгәрмәй, әммә башҡорт телендә был мөһим әһәмиәткә эйә. Телде боҙоп һөйләгәнсе, әйҙә, вәғәзде рус телендә уҡыһындар, унда тик бер форма ғына ҡулланыла.

### Тел ҡаҙнаһы - һүҙлек составы тураһында

Бөгөн донъя кеше өсөн шул тиклем тарайҙы. Был, беренсенән, ҡайһы берәүҙәрҙең бер көн - Америкала, икенсе көн - Японияла, өсөнсө көн Мысырҙа йөрөүендә сағыла. Икенсенән, донъя хәбәрҙәрен тиҙ арала төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары аша белә алыу ҙа киңлекте бәләкәсәйтте. Һөҙөмтәлә, бөгөн телебеҙгә лә сит телдәрҙән неологизмдар күпләп инә. Бынан ҡурҡырға ярамай, был телдең һүҙлек составын байытыуҙың бер юлы. Ваҡыт үтеү менән ул һүҙҙәрҙең күбеһе ҡулланылыштан төшөп тә ҡаласаҡ. Телдең байлығы әҙәби әҫәрҙәрҙә һаҡлана, яҙыусылар телдең төп һаҡсылары булып тора. Пушкин әҫәрҙәренең һүҙлегендә 21 200 һүҙ бар. Бер ғалим Һәҙиә Дәүләтшинаның һүҙлеген төҙөгән, унда 8 мең һүҙ бар, был да әҙ түгел. Бөгөн ҡайһы бер яҙыусыларҙың һүҙлегендә 2 мең һүҙ бармы, юҡмы икән әле? Беҙ барған был һүҙҙәрҙе тергеҙеүе мөмкин түгел. Ә элек башҡорттарҙа эттән башҡа бер йән эйәһенә лә исем ҡушыу булмаған, малдың йәше, енесе, төҫө, башҡа төрлө билдәһе буйынса атап йөрөткәндәр: саптар айғыр, саптар бейә, аҡһаҡ ҡола, аҡбуҙ. Аҡбуҙат та исем түгел, ул төҫ. Башҡорттоң меңгә яҡын, ҡайһы бер белгестәр фекеренсә хатта 30 меңгә яҡын йылҡыһы булған. Хужа шуларҙың бөтәһен дә танып белгән, ниндәйҙер атты өйөрҙән айырып алып килергә кәрәк булған осраҡта, төҫө, йәше, енесе менән әйтһә, икенсе кеше бер ниндәй ауырлыҡһыҙ шул атты барып таба алған. Мәҫәлән, сыбай ҡашҡа саптар бейә, тиһә, теге өйөрҙән шул атты алып килә. Сыбай ҡашҡа - ул аттың маңлайынан алып танауының осона тиклем төшкән аҡ һыҙат була. Маңлайында ғына булған осраҡта, йондоҙ ҡашҡа, тип йөрөтөлә. Ғәрәптәрҙә дөйәгә ҡарата, төньяҡ халҡында ҡарға ҡарата шундай һүҙҙәр күп. Рус телендә аралашҡанда ҡулланған һүҙҙәр ҙә шул ике меңдән артмай. Ә бына Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының һүҙҙәр картотекаһында 70 меңгә яҡын башҡорт һүҙе бар. Быға аптырарлыҡ та түгел, мәҫәлән, йылҡы малының төҫөн белдергән һүҙҙәр генә лә борон йөҙҙән ашып киткән. Бөгөн башҡорт теленең ике томлыҡ һүҙлегенә йылҡы малының төҫөн белдергән 42 һүҙ индерелгән. Халыҡ йырҙарында ла төҫтәрҙе белдергән һүҙҙәр осрай, ҡайһы берәүҙәр уның мәғәнәһен аңламай үҙгәртеп ебәргән осраҡтар ҙа юҡ түгел. Хәҙер беҙ йылҡысылыҡ менән шөғөлләнмәгәс, ҡулланылыштан төшөп ҡала Даль 200 мең һүҙ тапҡан, уның был хеҙмәте әлегә тиклем әһәмиәтен юғалтмаған, бер ҡасан да юғалтмаясаҡ. Беҙгә лә башҡорт теленең һүҙлеген эшләп, бына ошондай һүҙҙәребеҙҙе шунда индереп булһа ла һаҡлап ҡалырға кәрәк.

Элек-электән беҙҙә йөкмәтке тигән һүҙ ҡулланыла торғайны. Хәҙер шуны, ни эшләптер, эстәлек һүҙе менән алмаштырҙылар. Кәрәкме, кәрәкмәйме, бөтә урында эстәлек ти ҙә һөйләйҙәр. Эстәлек - ул дөрөҫ һүҙҙер ул, ләкин ул башҡорт уйлап тапҡан һүҙ түгел. Башҡорттар уйлап тапҡан һүҙ - йөкмәтке, унан ситкә китергә ярамай. Туған телебеҙ, республиканың дәүләт теле булараҡ, башҡорт һүҙҙәренә өҫтөнлөк бирергә тейешбеҙ. Ә беҙ тотабыҙ ҙа икенсе телдең һүҙҙәрен үҙебеҙҙең телгә индерергә тырышабыҙ. Кемгәлер оҡшарға тырышыуҙанмы, ярарға тырышыуҙанмы икән, һәр хәлдә, шундай осраҡтар йышайҙы. Күтәрмә һүҙен *"болдор"* тип тә һөйләйҙәр. Беҙҙең яҡта болдор тип әйтһәң, бер кем дә аңламай һине. Башҡорт кешеһе болдор тимәй, күтәрмә, ти.

Башҡорттар йәшәгән бөтә райондарҙа, күпселек ауылдарҙа булдым. *"Миләш"* тип һөйләүселәр бик һирәк, башҡорттар *"мышар"* һүҙен ҡуллана. Әҙәби телдә мышар тип берәү ҙә һөйләмәй. Аңлаймы, аңламаймы, миләш тиҙәр. Нимәһе менән *"миләш"* һүҙе яҡшы, ә *"мышар"* һүҙе насар? *"Мышар"* тип һөйләшеп үҫкән шағирҙарыбыҙ *"миләш"* тип шиғыр яҙа. Ҡасандыр муйылды *"шоморт"* тиҙәр ине, ярай әле хәҙер муйыл һүҙе әҙәби телгә кире ҡайтты. *"Мышар"* һүҙен дә ҡайтарырға кәрәк. Бер үк мәғәнәне аңлатҡан, инеү-кереү кеүек төрлө ҡылымдарҙың да икеһен дә ҡулланырға була. Гел генә кереү менән алмаштырырға ярамай, инеп тә китергә кәрәк ҡайһы саҡта.

Мин инде күптән *"иреү"* һүҙе тураһында әйтә киләм. Башҡорт телендә иреү һәм эреү һүҙҙәре ике төрлө мәғәнә аңлата. Татар телендә шул уҡ ике һүҙҙең мәғәнәләрен бер генә һүҙ белдерә - эреү. Уларҙа ҡар ҙа эрей, һөт тә эрей, күңел дә эрей. Ә башҡорттарҙа һөт кенә эрей, ҡалған бөтә нәмә лә ирей. Эреү - сифатты алмаштырыу, иреү - ул ҡаты хәлдән шыйыҡҡа күсеү. Кемдер, йөрәгем эрене, тип әйтә икән, ул йөрәкте сығарып ташларға ғына ҡала. Йәки күңелең эрегән икән, ул серегән күңел була. Шуның кеүек һүҙ формалары телебеҙҙең үҙенсәлеген һаҡлай икәнен онотмай, уларға һаҡсыл ҡарарға тырышырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғалим билдәләүенсә, ысынлап та, телмәребеҙҙә осраған хаталарға артыҡ иғтибар бирергә лә кәрәкмәйҙер. Кемдер, бәлки, башҡорт теленең баҫымды дөрөҫ ҡуйыуҙан да мөһимерәк проблемалары бихисап, тиер. Әммә тел - тере шишмә икән, уның да үҙ инеше, башланғысы бар. Ни тиклем шул инеш тиҙерәк быҫратыла: ябай ғына һүҙҙәр дөрөҫ әйтелмәй, ялғау ҡушҡанда хаталар ебәрелә, интонация һәм баҫым дөрөҫ ҡуйылмай, сүп-сар һүҙҙәр күпләп индерелә - шул тиклем тиҙерәк тел дә үҙгәрә, яйлап уның тәме китә, ярлылана. Шуға ла, әйҙәгеҙ, хаталар ебәреп, телебеҙҙе йәмһеҙләмәйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште,**
**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

***✓ Сәмерхан гөбөрҙәтеп һыйыр һауған кәләшен күрергә өмөтләнеп барһа ла, лапаҫ аҫтында берәһе көйшәнеп ятҡан, икенсеһе ҡапҡа бағанаһына арҡаһы менән ышҡынып, баҡырып торған һыйырҙарҙан башҡа йән эйәһе юҡ ине.***



Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

# ЙӘНБИКӘ, йәки әжәлдәрең етһә...

(Хикәйә)

–Әбей, - тине Сәмерхан, кухняла ҡыштыр-ҡыштыр нимәлер эшләп йөрөгән Үлмәҫбикә ишетһен өсөн, тауышын күтәрә биреберәк. - Әбей!

- Ни булды? - тегеһе бабай эргәһенә сыҡманы, әммә ҡыштырҙауын ҡуйып торҙо.

- Әллә, мәйтәм, ауылға ҡайтып киләйекме?

Был хәбәрҙән һуң Үлмәҫбикә, итәгендәге алъяпҡысына ҡулын һөртә-һөртә, ҡарты яғына сыҡты.

- Бынағайыш, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, - тине ул көттөрөп кенә. - Кемгә төбәп ҡайтмаҡсыһың? Уттай ҡыҙыу эш мәлендә кем һине ҡолас йәйеп көтөп тора?

Ҡарты өндәшмәне.

- Әллә туйға килгәндә берәйһе саҡырып ҡайтҡайнымы?

Әбейенең үҙенә төбәлгән үткер ҡарашынан Сәмерхан кесерәйеп ҡалғандай тойолдо.

- Юҡ та. Хәлемде үҙең күреп тораһың, бөгөн былай, иртәгә...кем белә. Йәшәгән саҡлы йәшәп булмаҫ. Ҡунаҡҡа түгел, ҡайтып күреп кенә килһәк тигәйнем.

- Теләһәң нишлә, мин бармайым. Инде мин йәш түгел, анауынсама ергә барып, көнөндә урап ҡайтырға. - Үлмәҫбикә үпкәләгәнен белдерергә тырышып, бәлки, Сәмерханды уйынан дүндерергә теләптер, ҡаты баҫып кухняһына ыңғайланы.

- Әләйһәң, Фәрит күренһә, өндәшсәле, инеп сыҡһын.

Сәмерхан, өй йылы булыуға ҡарамаҫтан, юрғанын рәтләп ябынды. Йәйҙең матур көнөндә ошолай кеше көнлө булып ятыуына эсе бошто. Юғалтҡан һаулығын кире ҡайтара алмаҫын белә, йүнәлергә өмөт тә итмәй. Ярай әле, мәлендә шуны аңлап, ҡыҙының туйын үткәреп ҡалды. Үлһә лә үкенмәҫ ине лә, бынау малайы йәлке. Атаһы барҙа башлыкүҙле була алмай ҡала. Әрмеһенән имен-аман йөрөп ҡайтһа, егет кеше бирешмәҫ тә ул. Институттың ике курсын бөтөрөп китте, ҡайтҡас, Алла бирһә, тамамлап, ҡулына һөнәр алһа, ҡайҙа барһа ла юғалмаҫ.

Өфөлә дауаханала ятып, ауырыуынан төҙәлеп булмаҫын белеп ҡайтҡас та, туйҙы үҙе ҡабаландырҙы Сәмерхан. Былай, йәй башына тип уйлап торалар ине. Майҙа өйләнешеү тыйыла, ә йәйгә хәтлем хөртәйеп китһәм, минең файҙам теймәҫ, рәтем барҙа үткәреп ҡалайыҡ, тип, апрелдә үк Зәйтүнәһен кейәүгә биреп ебәрҙе. Күптән таныш, осрашып-күрешеп йөрөгән булаsаҡ ҡоҙаһы Сәмерхандың хәленә инде. Ашыҡтырып дөрөҫ эшләгән, әле бына йәйҙең башы ғына, ә ул түшәгенән дә саҡ-саҡ тора бит.

Туйҙа телен тыймай, әҙерәк артыҡ ысҡындырып ебәргәйне, әле бына әбейе шуға кәксәйеңкерәп йөрөй.

...Йәштәрҙе тәбрикләп, бүләк һалғанда, ҡайһылыр ҡоҙа:

-Бай булығыҙ, бар булығыҙ. Теләгән нәмәгеҙ алдығыҙға килеп торһон,-тип башлағайны, ҡыҙмаса Сәмерхан ултырған еренән рюмкаһын күтәреп:

- Һай, ҡоҙа, әйттең һүҙ, байлыҡ - ул бер айлыҡ, мөхәббәттәре булһын. Ошондай ҙа матур тормошта йәнең теләгәнең менән һөйөп-һөйөлөп йәшәүҙәргә ни етә! - тип ҡысҡырҙы ла: - Их, йәшәй белер инем дә ул, йәшлек кенәм үтеп киткән. Үкенесе генә ғүмергә етерлек... - тип, йәшкәҙәгән күҙҙәрен еңе менән һыпырып, араҡыһын төп күтәреп ҡуйҙы.

- Башланы инде, хәҙер йырлайһың ғына ҡалды. - Үлмәҫбикә торорға ынтылған ҡартының салғыйынан тартып, урынына ултыртты. - Ҡартая белмәгән ҡарт ишәк! - Үҙе ҡысҡырып көлдө. Матур көлә кәһәрең, алтмышты үтһә лә, төҫ ташламай, һөйкөмлө генә олоғайып бара.

Табындағылар йылмайышты.

- Ә ниңә, йырлармын да шул, - тине ҡарты киреләнеп.

- Әтеү, ҡоҙа, йырла, йырла әйҙә.

- Тартынма, туйҙа ла йырламағас.

- Һин ниндәй ҡарт, ти, самый егет сағың. Йәле, йә, - тип дәртләндерҙеләр.

Сәмерхан инәлтеп торманы. Әкрен генә башланған йыр, тора-бара һәммәһен дә тетрәндереп, бар бүлмәне һағышҡа сорнаны.

- Биргәс, бирә икән Хоҙай мондо, - тиеште ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар.

...Әжәлдәрең етһә, әйт үҙемә,
Йәнбикә, Йәнбикә,
Һинең өсөн үҙем үлермен...

Ошо йырҙы ғәфү итә алмай Үлмәҫбикә. Башҡа йырламам, тип һүҙ бирһә лә, мәле етеп, башына сыҡтымы, әйткән тәүбәһе онотола ла ҡуя. Зиһенендә тик бер генә йыр, бер генә исем - Йәнбикә...

Йырлап бөткәс, күҙҙәре мөлдөрәмә йәшкә мансылған ҡыҙын ҡосаҡланы:

- Ғәфү ит мин иҫәрҙе, балам, байрамыңдың йәмен ебәрҙем...

- Юҡ, атай, киреһенсә, әсәйем дә беҙҙең менән бер табында ултыралыр төҫлө тойолоп китте. Рәхмәт һиңә...

Табын бер мәлгә генә шымып ҡалды ла, үҙ яйы менән гөрләп-шаулап дауам итте...

* * *

- Нимәгә саҡырғайның, олатай? - Бабайҙың ҡаҡса тарамыш ҡулын ҡыҫып күрешкәс, Фәрит ҡаршылағы креслоға ултырҙы.

- Йомош бар ине, улым. Бөгөн-иртәгәләре буш булмайһыңмы?

Күршеһе саҡ ҡына уйланды.

- Бушмын, шикелле.

- Әләйһәң, бик яҡшы. Мине Ҡайынлыға алып барсәле. Имгәк тимәһәң...

- Ҡайынлыға уҡмы ни! - Фәрит һыҙғырып ебәрҙе. Сәмерхан уға үҙенең районы, ауылы хаҡында йыш һөйләй, Фәрит ихлас тыңлай, хатта күп кешеләрен белә лә төҫлө.

- Бик алыҫ бит әле ул Ҡайынлы. Йомошоң оҙаҡмы?

- Юҡ, юҡ, көнөнә әйләнерһең.

- Ярай, ҡасанырак ҡуҙғалырға һуң?

- Һинең ваҡытыңа ҡарап, Фәрит улым. Миңә ҡалһа, хәҙер осорҙай булып ятам.

- Һөйләштек, олатай, ҡайтып сәй эсеп киләйем дә. Һин дә тамаҡ ялғап, әҙерләнеп кенә тор. Юл хәлен белмәҫһең, яҡын ара түгел бит.

Сығырға ыңғайлаған күршеһенә Сәмерхан яҫтыҡ аҫтынан алып аҡса һондо.

- Бензиндан ҡалғанына юлға ваҡ-төйәк алырһың. Минең тамаҡ артынан йөрөрлөк рәт самалы...

Фәрит әйләнеп килеүгә ул әбейе әҙерләп биргән ҡоротло һурпаны эсеп, аҙ-маҙ әйберен сумкаға тултырып ҡуйғайны. Күршеһе уның эре һөйәкле, әммә һуңғы ай эсендә генә ите төшөп, шау һөйәккә ҡалып барған еңел кәүҙәһен бишенсе ҡаттан күтәреп тигәндәй төшөрҙө. Подъезд ишеге төбөндә Үлмәҫбикә әллә үпкәләп, әллә борсолоп, китеүселәрҙең артынан байтаҡ ҡарап торҙо.

Дүрт сәғәт тирәһе асфальттан елдереп кенә барҙылар. Шофёр эргәһендә һин дә мин тирә-йүнде байҡап килгән Сәмерхан, оло юлдан ҡайырылып, шоссеға төшөп, һелкетә башлағас, машинаны туҡтатты.

- Артҡы урында терәлеберәк барайым әле. Эс-бауырым өҙөлә.

- Арып киткәнһеңдер, бабай, әйҙә, әҙерәк ял итеп алайыҡ.

Машинанан сығып, кирелеп-һуҙылып алғас, Фәрит ҡырҙараҡ бормаланып аҡҡан йылғаға йүнәлде. Сәмерхан да ҡатҡан һөйәктәрен яҙырға уйланы.

- Эй, ҡарт тәре, ҡарт тәре. Майланмаған арба күсәре кеүек шығырҙай был һөйәктәр, улар ҙа ҡартая икән. Һәр ҡыбырлауың һыҙландыра, кәһәрең. - Ул йылғаға төшөргә хәле етмәҫен тойоп, "Жигули"ға һөйәлде.

* * *

Һай, матур ҙа һуң уның тыуған төйәге! Йәшел ыуыҙ япраҡлы ҡайындары, тәүге сабыйын ҡулына алып һөйөнгән әсәләй, һутҡа тулышҡан кәүҙәләрен оялсан йәшереп, селтер-селтер сер һөйләй. Туғайҙары һап-һары бәпембә, күкшел умырзая менән кәкүк сәскәһенән биҙәнеп тә өлгөргән. Үлмәҫбикәнең ауыҙ һыуы ҡоротоп маҡтаған төрөк баластарың ары торһон. Ә һауаһы һуң, һауаһы! Һуңғы егерме йылдан ашыу ҡала төтөнөн еҫкәп, тыуған яҡ һауаһының сафлығын онотоп та ебәргән икән. Йылға буйына һарылып үҫкән муйыл, ҡарағат сәскәләре, йәм-йәшел япраҡ, дымҡыл тупраҡ еҫе бергә ҡушылып, тәнгә сихәт, йәнгә йәннәт өҫтәрлек тере һыумы ни! Күҙгә күренмәй генә ҡоштар сутылдай, һабантурғай менән беснәк ярышмаҡ була, ахыры. Һиҫкәндереп, яҡында ғына кәкүк моңайып ҡуйҙы.

- Кәк-күк, кәк-күк...

Инде генә уның саҡырыуын һанарға әҙерләнгән Сәмерхан, ике генә ауазды ишетеп, тертләп китте.

- Ике йылмы, ике аймы, әллә ике генә көнмө, рәхмәт төшкөрө?

Был уйҙан зиһене тарҡалып, аяҡ быуындары йомшарып, тотона-тотона саҡ машинаға инеп ултырҙы.

- Үәт, шайтаның, икәү генә тигәнсәле, - тип һөйләнде үҙе.

Саф йылға һыуында сайынып, күңеле күтәрелеп, тәбиғәттең хозурлығына һоҡланып, дәртле баҫып Фәрит килеп етте.

- Ҡуҙғалдыҡмы, олатай? Эй, донъяның матурлығы! Көнө ниндәй бит әле, көнө!

Кәкүк саҡырыуынан йөрәгенә шом төшкән Сәмерхандың тирә-яҡ гүзәллеге хаҡында гәпләшергә теләге юҡ ине лә, яуапһыҙ ҡалыуҙы килештермәйенсә:

- Әйтмә лә, улым, ожмахың ары торһон, - тип егетте йөпләп ҡуйҙы. Ҡуҙғалып киткәс, сумкаһына башын терәп, янтайып ятты. Кәкүк тауышы... Тиккә түгелдер был ике генә саҡырыу... Теге ваҡытта ла, бынан егерме йыл әүәлерәк, ошондай уҡ сихри иртә ине бит...

* * *

Башҡа көндө йоҡоһон туйҙырып, кәләше эшен теүәлләп, сәйе әҙер булғас ҡына тора ине Сәмерхан. Бөгөн, ниңәлер, уянды ла, өйҙәге тынлыҡты тыңлап ятты. Эргәһендәге бәләкәй карауатта ҡыҙы Зәйтүнә йоҡлай. Ике ҡулын да баш аҫтына һалып, бөгәрләнеп кенә ятҡан. Иртән һалҡынайта шул. Сәмерхан тороп, ҡыҙының юрғанын рәтләп япты, арҡаһынан тупылдатып яратты. Сибәр булып үҫеп килеүсе ҡыҙына матур төштәр күренәләр, күрәһең, йылмайып ҡына йоҡлай. Кескенә улы икенсе бүлмәлә әсәһе менән. Сабыйын күргеһе килеү теләген баҫып, уятып ҡуйыуҙан ҡурҡып, Сәмерхан тышҡа сыҡты.

Икмәккә генә яғып ашарлыҡ хуш еҫле ауыл иртәһе. Сут-сут сыйырсыҡ һайрай, кәкүге лә кемдеңдер ғүмерен һанап маташа. Йомошон үтәп, өйөнә ыңғайлаған Сәмерханды күрше ихатанан килгән тауыш туҡтатты.

- Ҡәһәр төшкөрө, кит бар, кит!

Ул ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай, ҡойма аша күҙ һалды.

- Шәпме, инәй, нимә таң тишегенән һуҡранып йөрөйһөң? Кемдең тетмәһен тетәһең?

- Шәп кенәме, Сәмерхан улым. Әй эттәгенәһе, бынау кәкүкте ҡыуам. Ҡороғоро, нисәмә көн минең талыма ҡуныып, күкелдәп тик ултыра.

- Ҡуйсәле, инәй, ошондай матур көндөң йәмен ебәреп, әрләмәсәле. Ҡысҡыраһы килгәс, әйҙә, ҡысҡырһын, ни зыяны тейә...

- Әстәғәфирулла тәүбә, тьфү-тьфү, ана урманына китеп саҡырһын. Йорт тирәһендә күкелдәһә, яман була ул, улым. Аллам һаҡлаһын, балаға, күрше-күләнгә һаулыҡ бирһен. Көш-көш, үҙ башыңа саҡыр, мәлғүн.

Әбей ерҙән сыбыҡ-сабыҡ алып, талға һуҡҡыланы, хатта кескәй таш сүпләп, ағас араһында күренмәй генә зарыҡҡан ҡошҡа сәпләп тә алды.

Әбейҙең хөрәфәтенән йылмайып инеп барған Сәмерханды күрше инәй йәнә туҡтатты.

- Көтөү китергә лә ыуахыт, нимә һыйырығыҙ баҡырып тик тора, килен йоҡлап ҡалмағандыр?

- Юҡтыр, һауып ултыралыр.

- Һауһа, баҡырмаҫ ине. Бар әле, байҡа. Йәш саҡта йоҡонан тәмле нәмә булмай. Етмәһә, йәш бала менән йонсоп, һуң ятһа, көтөүгә һуңлап та ҡалыр.

Сәмерхан гөбөрҙәтеп һыйыр һауған кәләшен күрергә өмөтләнеп барһа ла, лапаҫ аҫтында береһе көйшәнеп ятҡан, икенсеһе ҡапҡа бағанаһына арҡаһы менән ышҡынып, баҡырып торған һыйырҙарҙан башҡа йән эйәһе юҡ ине. Шундай саф, сағыу иртәнең йәмен ебәреп һөйләнгән күрше әбейгә лә, кеше бимазалап, һыйырын баҡыртып ҡуйған бисәһенә лә асыуы килде уның.

- Эй, тор, көтөү китә, һуңлайһың бит, -тине ул бәпесен ҡосаҡлап, бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡан Йәнбикәгә. Ҡатыны ҡымшанманы. - Үлек кеүек йоҡлайһың. Әйтерһең, эш ҡыйратып йөрөйһөң. Тор! - Сәмерхан ҡатынының беләгенә ҡағылды ла, нисек итеп ҡулын тартып алғанын да һиҙмәй ҡалды. Йәнбикәнең тәне боҙҙай һалҡын ине.

**(Дауамы бар).**

БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...

# МӘҢГЕЛЕККӘ...

## һөйөү йыры



**Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты Әмир Мәзитов тормошто, йәшәйеште, үҙен уратып алған мөхитте, тарихты, фольклорҙы ижади күҙлектән сығып, тик үҙенсә генә стилдә төшөрә.**

Реаль булмаған хәл-ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе һынландырып, рәссам тамашасыны тормош, йәшәү тураһында уйланырға мәжбүр итә, уны бәхәскә саҡыра. Нимә ул тормош, йәшәү һәм үлем, нисек был фани донъяла үкенмәслек итеп йәшәргә, һинең турала яҡты иҫтәлек ҡалырмы, әллә һин, туҙан бөртөгөләй, юҡҡа сығырһыңмы?

Уның һүрәттәре ("Арба", "Минең төшөм", "Хызыр", "Көрәш" һ.б.) - үҙе бер йомаҡ, сер. Тәү ҡарашҡа ябай ғына булып тойолған картиналар асылында иһә тәрән философик мәғәнәгә эйә. Әмир Мәзитовтың уйынса, рәссам ул фотограф түгел, ә ижадсы, философ. Шуға ла уның һүрәттәрендә символик образдар идеяны - төп фекерҙе асып биреүҙә иң киткес ҙур роль уйнай. Уның бөтөн һүрәттәрендә лә тиерлек сағылыш тапҡан ағас образы - уңдырышлыҡты, тормошто, ә ағас тамырҙары һәм ботаҡтары - быуындар бәйләнешен, тәрән суғырмаҡлы, тамырҙары ҡалҡып торған ҡулдар - кешенең оҙон ғүмер юлдарын үтеүен күрһәтеп тора. Бала - ул ғүмерҙең ҡабатланышы, дауамы, яңы быуын, йәшәү мәғәнәһе. Йылғалар башы, һыу - тормоштоң үҙе, йыйып әйткәндә, ғаилә, йорт, ауыл һ.б.

Ә. Мәзитовтың әҫәрҙәренә күп планлылыҡ, төрлө ваҡыт араларының йәки быуындарҙың бәйләнеше, ҡапма-ҡаршылыҡ, декоративлыҡ, милли колорит хас. Һүрәттәренең атамаһы уның идеяһына тап килмәүе лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй генә деталдең тотош картинаға исем биреүе ихтимал. Метафораға ҡоролған һүрәтте кеше оҙаҡ ҡына "уҡырға", һүрәт аша рәссам менән бәхәскә инергә, уның ҡуйған һорауҙарына яуап эҙләргә тейеш. Бына, мәҫәлән, авторҙың "Балыҡтар йыры. Йылғалар башы" исемле һүрәтендә иғтибарһыҙ, ҡабалан тамашасы көмәгә тейәлгән тарбаҡ меңйәшәр ағасты, тирмәләрҙе, ағас ботағында элеүле торған бала ятҡан сәңгелдәкте генә күрер. Ләкин рәссамдың маҡсаты, минең уйымса, бөтөнләй икенсе хәҡиҡәтте асып биреүҙә.

Иң тәүҙә күҙгә ташланғаны - ул донъяның өс өлөшөн (күкте, ер өҫтөн, ер аҫтын) тоташтырып торған ғәжәйеп тамырлы, ботаҡлы тарбаҡай ағас булыр. Тимәк, асман (космос), хәҙерге йәшәйеш (фани донъя), теге донъя (баҡыйлыҡ) бер-береһенән айырылғыһыҙ. Йәшәү менән үлем тураһында философия ул. Тыуымдан ҡалмаған, үлемдән ҡалып булмай. Ағастың ботаҡтары, тамырҙары көслө һәм ныҡ. Әҙәм тамыры ла ағас тамырылай, тиҙәр ололар. Тамырҙар - ата-олатайҙар, ә ботаҡтар - уларҙың балалары. Ағас ботағына элеүле бала ятҡан сәңгелдәк - ейәндәр, яңы тормош, яңы емеш. Шулай итеп, һүрәттәге ағас - күп быуынлы шәжәрә ағасына ишара.

Көмә образы - ул Ер шары, ул да түңәрәк. Ул - әҙәм йәшәгән утрау, унда йорттар - тирмәләр, ағастар бар. Икенсе төрлө фараз иткәндә, ул ғаилә усағы булыуы ла мөмкин. Төрлө яҡлап ҡуйылған терәүҙәр, уйлауымса, ошо көмәнең - ғаиләнең (йәки Ерҙең) рухи һәм матди бөтөнлөктәре символы ул. Шулай ҙа көмәнең, тапсыҡ кеүек, дарьяларҙа сайҡалып, аҙашып, селпәрәмә килеү ихтималлығын да күҙҙән ысҡындырырға ярамай. Еребеҙ - һүрәттәге көмә - яҡлауға, ҡурсалауға мохтаж. Терәүҙәре һәр саҡ ныҡлы булһын уның!

Рәссам фекеренсә, донъя - мәңгелек, ә кеше ғүмере - бер мәл генә. Шулай ҙа ғүмерҙе дауам итеүсе балаларың булһа, тамырҙарың - ата-әсәң һау булһа, маҡсаттарың изге булһа, йәшәргә лә йәшәргә әле.

Һүрәттең сюжетында ҡапма-ҡаршы мәғәнәгә эйә образдар бик күп: мәңгелек - бер миҙгел, йәшәү - үлем, ҡоро ер - дарья, фанилыҡ - баҡыйлыҡ, ер - күк, сәңгелдәктәге бала - меңйәшәр ағас, бала илауы һәм балыҡтарҙың өнһеҙлеге һ.б.

Шулай итеп, был һүрәттә автор ер рухын, быуындар бәйләнешен, тыуған ил темаһын, кешенең йәшәү мәғәнәһен, тормош асылын асып бирә алған. Контраст төҫтәге майлы буяуҙар менән киндергә декоратив төшөрөлгән һүрәте рәссамдың ниндәй талантлы кеше, сәнғәттә үҙ урынын тапҡан оҫта икәнлеген асып биргән.

Һүрәтте ентекләп, тағы ла бер иғтибарлап ҡарағыҙ әле. Шул саҡта һеҙгә балыҡтар йыры ишетелгәндәй булыр. Мәңгелеккә һөйөү йырын йырлайҙар улар.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА.**

ЗАУЫҠ



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Беҙ, ҡатын-ҡыҙ, күп һөйләйбеҙ
Кәрәк-кәрәкмәгәнен:
Бала тәмен, донъя ғәмен,
Нисек ғүмер үткәнен...
Шулай юҡ-бар һөйләгәндә
Әсәйемде иҫкә (а)лам:
"Кеше артынан кеше һөйләү -
Иң насар холоҡ, балам".
Кеше һөйләргә ашыҡмам,
Уның хәлен белмәйсә,
Кеше хәлен кеше белмәй,
Үҙ башына төшмәйсә.
Белеп булмай иртәгәһе
Көндөң нисек тыуырын,
Бәлки, иртәгә мин үҙем
Тел осонда булырмын?
Шуны беләм: һөйләшһәм дә
(Мин дә ҡатын затынан),
Күҙгә ҡарап әйтә (а)лмаҫты
Һөйләмәҫмен артынан.

* * *

Әсәйем биргән ҡомарҡкым -
Самауыр үрҙә тора,
Электр термосым ҡайнап
Өҫтәлдә түрҙә тора.
Самауырға ҡарайым да,
Әсәйемде иҫкә (а)лам:
"Өйөңә ингән кешене
Сәйһеҙ сығарма, балам!"
Хәҙер һәр кем үҙ өйөндә,
Инеүсе аҙ, сыҡҡан юҡ,
"Кеше килде!" тип йүгереп,
Самауырҙы тотҡан юҡ...
Заманалар үҙгәрҙе шул,
Үҙгәрҙек үҙебеҙ ҙә,
Осрашырға сәбәп тә юҡ,
Юҡ һөйләр һүҙебеҙ ҙә.
Һинең төҫөң итеп, әсәй,
Самауырҙы һаҡлайым.
Ә шулай ҙа сәй эсермәй
Кешене сығармайым.

* * *

Ауыл балаһы эш күреп
Үҫә бәләкәй саҡтан.
...Эш өйрәнеп үҫкән саҡтан
Инде күпме һыу аҡҡан!
Алты йәштән бесән йыйҙыҡ,
Ун йәштән һыйыр һауҙыҡ,
Ун икелә салғы алдыҡ,
Ун биштә кәбән һалдыҡ.
Өйҙәге эште әсәйем
Һәр кемгә бүлә ине,
Ҡабатламай - тик бер әйтә,
Аҙаҡ тикшерә ине.
Әсәйем йомош ҡушҡанда
Ыңғайы саба инек,
Йәлләһаң, эргәгә галуш
Шап итеп ҡала ине.
Һаман шулай: уйлағанды
Ыңғайына эшләйбеҙ,
Балаларыбыҙ ҙа шуға
Өйрәнгәнде теләйбеҙ.
Бөгөнгә эш иртәгәгә
Ҡалғанды яратмайбыҙ:
Әсәйемдең оса торған
Галушын онотмайбыҙ.

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

БАЛАҢА УҠЫ!

# ЯРЫШ

Хәсән бик тә изгелекле малай булған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул автокатастрофала күреү һәләтлеген юғалта. Ләкин малай сит ярҙамһыҙ йәшәй алыуын иҫбат итеп, йыш ҡына ҡалаға ауылдан бер үҙе генә бара торған.

Бер ваҡыт Мортаза исемле ауылдаш малайы яуыз ғына итеп унан көлөргә теләп, шулай тигән:

- Хәсән, әйҙә ярыш ойошторайыҡ: кем ҡалаға беренсерәк барып етер икән?

Хәсән, был тәкдимде ысынға ҡабул итеп, шулай яуаплаған:

- Мин ризамын. Әгәр ҙә беренсе килһәм, куртканды бирәһеңме?

Мортаза, был шарттан шарҡылдап көлөп:

- Беренсе килһәң, бирәм, әлбиттә, - тигән.

- Минең тағы ла бер шартым бар: ярыштың ваҡытын үҙем билдәләйем.

- Үҙең теләгән барлыҡ шарттарыңды ла ҡуйһаң була, - тигән үҙенең еңеүенә ышанған Мортаза.

Ҡара төндә улар урман юлы буйлап ярыш башлағандар. Ҡараңғылыҡ һәм яҡтылыҡ араһында айырманы белмәгән Хәсән алға киткән. Ә Мортаза ҡара урман эсендә аҙашып, соҡорға йығылып төшөп, бите сыйылып, ҡалаға Хәсәндән ярты сәғәткә һуңыраҡ барып еткән.

Бахыр Хәсән! Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисен белһә, улай эшләмәҫ ине ул. "Бер кем дә башҡалар араһында үҙенең өҫтөнлөгән күрһәтмәһен"

# НӘФСЕМЕ?

Ғәли менән Ғәйшә емештәрен өҙөп ҡабырға тип сейә ағасына менә. Ғәлигә ағастың иң осондағы сейәләр нығыраҡ бешкән кеүек тойола, шуға ла ул уларҙы өҙөргә тырышып, юғарыраҡ үрләй.

-Ботаҡтар бик нәҙек, һине күтәрмәүе мөмкин. Ул ҡәҙәре юғарыға үрелмә, емештәр бында ла өлгөргән бит, - тип иҫкәртә уны Ғәйшә.

Ләкин Ғәлиҙең күҙҙәре бары тик ағас осондағы емештәрҙе генә күрә һәм Ғәйшәне тыңламай. Шул арала ул сейә ботағы менән бергә ергә ҡолап та төшә һәм аяғын һындыра. Хәҙер инде ул аяғы гипслы көйө сейә ағасына алыҫтан ғына ымһынып, бик күп көндәр өйҙә ятып үткәрәсәк.

Ғәлиҙең был ҡылығын нәфсе тип атап буламы? Был тағы ла Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙең шул хәҙисен иҫкә төшөрә: "Кешенең алтын менән тулы ике шишмәһе булһа ла, уның өсөнсөһөн булдырғыһы киләсәк. Уның күҙҙәрен уның үле кәүҙәһенән башҡа бер ни ҙә туйҙыра алмаясаҡ".

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯМАН ШЕШТӘН...
## йәшелсәләр ҡотҡарыр

■ Һөт - һалҡын тейгәндә, ҡан баҫымы юғары булғанда файҙалы, уның составында кальций ҙа күп. Яңыраҡ ғалимдар уның тағы бер ыңғай ягын асыҡлаған, баҡтиһәң, ул эшкә һәләтлелекте арттыра икән. Һөт аҡһымында булған аминокислоталар гипоталамуста орексин гормоны бүленеп сығыуға булышлыҡ итә. Тап ошо гормон организмды тонуста тота ла инде. Ғалимдар раҫлауынса, һөт эскәндән һуң иғтибарлылыҡ арта, сөнки аминокислоталар шәкәрҙең тәьҫирен дә түбәнәйтә.

■ Тоҙҙо күп ҡулланыу ир-егеттәр өсөн бигерәк хәүефле. Япония ғалимдары билдәләүенсә, тоҙло ризыҡтарҙы йыш ашау ашҡаҙан яман шешенә килтереүе ихтимал һәм был күберәк ир-егеттәрҙә күҙәтелә. Ғалимдар 11 йыл буйына урта йәштәге 40 мең кешене тикшереп, тоҙло ризыҡ яратҡан һәр 500-өнсө ирҙең ошо сиргә юлығыуын асыҡлаған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа был күрһәткес күпкә түбәнерәк: 2 мең кешегә - 1 осраҡ.

■ Диетологтар йәй миҙгелендә күберәк редис ашарға кәңәш итә. Был йәшелсә күп сирҙәрҙән, мәҫәлән, йүткереүҙән файҙалы. Шулай уҡ редис С витаминына, калийға бай. Уның составындағы фитохимик берләшмәләр ямаш шеште булдырмай, ул ҡан баҫымын түбәнәйтә, иммун системаһын нығыта. Редис - диабет, ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙың да ризығы. Етмәһә, был йәшелсәлә калориялар аҙ - бер тәрилкә редиста 20 генә.

■ Арканзас университеты (АҠШ) ғалимдары музыканың ниндәй жанрҙары аппетитка йоғонто яһауын тикшергән. Асыҡлауынса, джаз, хип-хоп стилендәге музыка ризыкты тәмлерәк итә. Әлбиттә, ул аҙыҡтың тәменә йоғонто яһай алмай, бары тик баш мейеһенең тәм ҡуҙғытҡысына реакцияһын ғына үҙгәртә. Ғалимдар билдәләүенсә, классик һәм рок йүнәлешендәге композициялар аҙыҡтың тәмене бер ниндәй ҙә үҙгәреш индерә алмаған.

■ Ҡабаҡ - ашҡаҙан аҫты биҙҙәре яман шешенән һаҡлай. Яман шеш күҙәнәктәре үҙҙәре энергия бүлеп сығарыуға һәләтле түгел, шуға ла уларға шәкәр кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡабаҡтағы матдәләр яман шеш күҙәнәктәренә шәкәрҙе эшкәртергә мөмкинлек бирмәй. Лаборатор һөнлектәрҙә үткәрелгән һынауҙарҙың һөҙөмтәһендә яман шеш хәүефе 60 процентҡа түбәнәйгән. Ашҡаҙан аҫты яман шеше иң хәүефлеһе, был төр яман шештән кешеләр йышыраҡ үлә. Статистика буйынса, диагноз ҡуйылғандан һуң пациенттарҙың 6 проценты ғына һауыға.

■ Американың Ҡулланыусылар эше буйынса идаралығы ирен буяғыс етештереүсе 33 ойошманы тикшергән. Иң популяр ирен буяғыстарҙың 61 процентында ҡурғаш булыуы асыҡланған. Cover Girl, L'Oreal һәм Christian Dior кеүек билдәле маркалар продукцияһында ҡурғаш айырыуса күп. Иң ҡыҙығы, косметика ни тиклем осһоҙораҡ, шул тиклем унда ҡурғаш әҙерәк икән. Ҡурғаш нервы системаһына зыян килтерә, аҡыл кеүәһенә йоғонто яһай, хәтерҙе насарайта. Ул бигерәк тә ауырлы ҡатындарға хәүефле, ҡурғаштың бала төшөүгә, хатта ҡайһы бер осраҡтарҙа түлһеҙлеккә килтереүе билдәле.

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ



# ИМ БЕЛГӘН - ИМГӘНМӘҪ

**Мәҙинә әхирәтем тәүгә оләсәй булды: ҡыҙының ҡыҙы тыуҙы. Балалары ситтә, Сорғотта йәшәүгә ҡарамаҫтан, әхирәтем сыҙамаңы. Ләйләһе бала табыу йортонан сығыуға, алыҫ сәфәргә юлланды. Ике ай самаһы балалары янында тороп, күңеле булып, яңыраҡ ҡына ҡайтып төштө. "Әле лә ҡайтмаҫ инем, ике бүлмәле фатирҙа тығынырак булып китте: ҡоҙағыйым килеп ҡалды", - тип, йыйылып киткән хәбәрҙәрен һөйләп бөтөрә алмайынса, Мәҙинә ҡайтыу менән мине бәпес сәйенә саҡырып та алды.**

*- Шунан, әхирәт, оләсәй ролен килештерҙеңме инде? Ҡотлайым тәүге ейәнсәреӊ менән! Бәхете-тәүфиғы менән килһен, ата-инәһенә ҡыуаныс булһын. Ләйлән кейәүгә бер ул да табып бирһә, донъялары теүәлләнә, иншалла...*

- Рәхмәт, әхирәт, һинә лә ейәнейәнсәрҙәр ҡыуанысы теләйем. Һәйбәт кенә тороп ҡалдылар. Сабый ни, әле имә лә йоҡлай. Үҙе шәфҡәт тулашы булғас, бер ҙә албырғап, ҡурҡып тормай балам, ышанаслы тотона бәпескә. Әлдә генә шундуҡ имеҙә башлаған. Күкрәк һөтөнә етәме һуң инде! Хайуандың хайуаны имеҙеп үҫтерә балаһын. Ләйләмдең роддомда үҙе менән бергә бала тапҡан йәш кенә ҡатындарға иҫе киткән: күбеһе сабыйын имеҙеүҙән баш тарта, ти. Береһе, ирем күкрәктәремде күрһә, аҡылын юя, имеҙһәм, формамды юғалтырмын тип ҡурҡам, ти икән. Үәт әй! Йөрәк ярып сыҡҡан балаң өсөн йәнеңде бирерһең бында...Тик бөтә ҡатындар ҙа улай уйламай икән шул. Табиптарын да әйтер инем, ныҡышып та тормайҙар, ти. Уларға йәлме ни кеше балаһы - яһалма аҙыҡ бирәләр ҙә йоҡлап тик ята сабый. Әллә ниндәй, әллә кем тарафынан әҙерләнгән яһалма һөт ул - кем белә... Химияһы ла, дарыуы ла барҙыр әле составында, әйтеп булмай, күрмәгәс. Йәш балаға хәҙерге заманда хатта эсәһе һөтөнән дә аллергия, диатез булырға ғына тора. Ҡыҙым әйтеп ҡараған була икән дә, аҙаҡ мастит-фәлән менән яфаланып йөрөргә тура килмәһен, имеҙһәгеҙ, үҙегеҙ өсөн дә яҡшы бит, тип. Иҫтәре лә китмәй, ти.

*- Хәҙер ҡатын-ҡыҙ араһында түш ауырыуҙары арта бара икән, тип уҡыным әле яңыраҡ. Һөт биҙҙәре яман шеше "йәшәрә", ти белгестәр. Ғәфү ит, әхирәт, һүҙ ыңғайы ғына әйтеп ебәрҙем. Шунан, кейәү балаҡай нисек йөрөй, шатмы, әллә малай көтә инеме?*

- Кейәүемә рәхмәтлемен, ҡайһы бер ирҙәр кеүек, тәүҙән үк малай кәрәк, тип ҡаңғыртманы ҡыҙымды. Бәй, шулай булмайса, ул бит кемдеңдер теләгенә бәйле заказ буйынса алына торған нәмә түгел дә. Хоҙай Тәғәлә ни ҡушһа, шул була. Ә ҡоҙағыйымдың ҡыуанғанын күрһәң ине! Ул бит өс ул үҫтергән, исмаһам, улдарымдың ҡыҙҙарын һөйөргә насип булһа ине, тип теләгән дә теләгән. Кейәү, теленән ҡыуанһын инде балаҡай, ҡыҙҙар наҙлыҡай, нәфис, һөймәлекле була, атай күңелен дауалар бәлзәм бит ул минә, тип ҡулынан төшөрмәй сабыйҙы.

*- Халыҡта шундай юрамыш та бар бит, - тием әхирәтемдең һүҙҙәрен йөпләп, - ҡыҙ балалар күберәк тыуһа, һуғыш булмаҫ, донъялар именлектә торор, тиғән боронғолар. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙы һан яғынан да, сифат яғынан да арттырырға кәрәк. Бир балаларыңа йөкләмә, әхирәт, аңдарына һеңдер: бер бала - юҡ бала, ике бала - ярты бала, өс бала ғына бер балаға торош, тип өйрәткән түгелме йәштәрҙе халҡыбыҙ аҡылы?*

- Берәү менән сикләнмәҫтәре раҫ, сөнки Ләйләмдең кейәүгә иш булыр ир бала тапҡыһы ла килә бит..

*- Ул, тигәндән, туҡта, дуҫҡайым, блокнотымда интернеттан күсереп алған бер "шпаргалка"ята, ҡасандыр шулай, ҡыҙыма уҡытам, тип яҙып алғайным.*

- Һуң?

*- Һуңын үҙең күрҙең - ейәнле булдым даһа былтыр!*

- Ысынлап та... Эй, Хоҙайым, ҡана уҡый һалсы!

*- Ҡыҙ табырға теләгәндәргә кәңәштән башлана: "...ашаған ризығығыҙға тоҙ һалмағыҙ; күберәк һөт эсегеҙ, ит, балыҡ, йомортҡа, татлы тәгәмде үҙ итегеҙ; кофе, сәй, ыҫланған, маринадлы ризыктарҙы онотоғоҙ, персик, банан да ярамай. Малай теләһәгеҙ, киреһенсә, ризыкты тоҙлабыраҡ ашарға, колбаса, балыҡ, дөгө, макарон, картуфты күберәк ҡулланырға кәңәш ителә. Һөт ризыктары, йомортҡа, тәм-том менән мауыҡмағыҙ", тиелгән. Был ысул авторҙары 80 процент осраҡта уңыш вәғәҙә итә. Табиптар иһә сабый енесен планлаштырыуҙы 100 процент ышаныс менән үҙ яуаплылығына алып, экстракорпораль аталандырыу ысулы тәҡдим итә, ләкин һау-сәләмәт йәштәр быға риза булыр, тип уйламайым. Ҡайһы бер белгестәр енси яҡынлыҡ мәленең Ай фазаһына, ел йүнәлеше, ямғыр кеүек тәбиғәт күренештәренә тап килеүен дә бала енесен планлаштырыу менән бәйләй. Мәҫәлән, ир менән ҡатындың яҡынлығы Ай тулған мәлгә тап килһә, ир балаға йән бирелә, имеш. Бынан тыш, ошоға бәйле халыҡ һынамыштары һәм йолаларҙы өйрәнергә, ниәттәрҙе шуға ярашлы башҡарырға ҡушыла.*

- Ҡоҙағыйым әйтмешләй, Аллаһының эшенә ҡыҫылып булмаҫ. Кем тыуһа ла тыуып торһон, теүәл һанлы, үҙ ризығы, тәүфиғы менән килһендәр сабыйҙар был донъяға.

*- Эйе лә баһа, ҡалай килештереп тороп әйттең әле, ауыҙына бал да май! Ә инде халҡыбыҙҙың борондан килгән ырым-йолаларын өйрәнер өсөн башҡа сәбәптәр ҙә бик күп. Элек сабый аяҡҡа баҫып, атлап киткәнгә тиклем оло ҡатындар - оләсәйҙәр, инәйҙәр, имсе әбей-һәбей ҡурсыуында булған. Сабыйҙы ныҡ һаҡлап, ҡарап ҡына торғандар. Бер ҙә юктан булмағандыр инде бындай мөнәсәбәт уларға, сабый ыуыҙ ғына бит инде ул, уны ҡырҡ төрлө хәүеф һағалай, тип ышанғандар. Мәҫәлән, тыуғас та уға йүргәк исеме ҡушып торола, аҙаҡ, ҡырҡ көн тулмаҫ борон уҡ мулла саҡырып, насип исемен ҡушҡандар. Ҡырҡ көнгә тиклем өйҙә сабыйҙың янғыҙын ғына ҡалдырып сығып китеү тыйылған: ен алыштыра, тип ҡурҡҡандар. Биләүенә бысаҡ йә ҡайсы һалынған. Сабыйҙы күҙ тейеүҙән ҡурсыу - үҙе бер ҙур ырым. Ғөмүмән, ырым-йола белгән йүнле кеше сабыйға бер һирпелеп ҡарауҙан да тартынырға тейеш тә бит, быны хәҙер күптәр белмәй шул, үкенескә күрә...*

- Дөрөҫ әйтәһең, мин быға балалар янында булғанда үҙем ышандым. Бәпес күрәм, тип, Ләйлә менән аралашҡан күрше ҡатын инеп сыҡҡайны, шул кис тәкәтһеҙ иланы бит сабыйыбыҙ. Аптырап, табип саҡыртып та бөттөк, юҡ, илай ҙа илай был. Шунда ғына аңыма барып етте: күрше бисәнең күҙе тейгән! Сит ҡалала ҡайҙа әле ул муллаһы... Балалар бик ышанмаһа ла, "Аятел Көрси"ҙе, башҡа үҙем белгән доғаларҙы уҡыйуҡый, ҡат-ҡат өшкөргән булғайным, тирләп тороп ҡулымда уҡ йоҡланы ла китте сабыйынам.

*- Бына доғаның ҡөҙрәте! Күҙ һөҙө яман нәмә бит ул, кеше күҙенән хатта ағас ҡыуарыр, ти ине әсәйем. Ләйләнә шылтыратып әйт, сит күҙҙәрҙән аяп торһон бәпесен. Үҙе доғалар ятлаһын, уны-быны ғына белергә тейеш, ул бит хәҙер әсәй кеше. Беҙ бала саҡта әсәй-оләсәйҙәрҙән күреп-белеп, отоп ҡалған йолаларҙы йәштәргә өйрәтергә бурыслыбыҙ, тип уйлайым. Бала тәрбиәләү, донъя көтөү буйынса башҡа төр йолаларҙы ла иҫкә төшөрөп, барлап сығырға кәрәк. Ҡурсаулы, яҡлаулы булһындар, сәләмәт, татыу йәшәһендәр, тип теләһәк, йәштәрҙе быға өйрәтергә кәрәк. Беҙҙән башҡа быны кем эшләр?*

**Фәриҙә ИШБИРҘИНА**
**яҙып алды.**

Аһ-Аһ!

# ШӘКӘРҘЕ...

## күберәк ашайбыҙ



**Росстат етәксеһе урынбаҫары Константин Лайкам белдереүенсә, үткән быуаттың 90-сы йылдары менән сағыштырғанда, бөгөн рәсәйҙәр аҙыҡ-түлек һатып алыуға күберәк аҡса тотона. Рәсәй медицина фәндәре академияһы Туҡланыу институты менән берлектә үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙең тәүге һөҙөмтәләре буйынса, беҙ хәҙер шәкәрҙе балыҡҡа ҡарағанда күберәк ашайбыҙ, ә зарарлы ризыҡтар иҫәпләнгән чипсы һәм татлы газлы эсемлектәрҙе, ғаиләнең килеменә ҡарамайынса, һәр бала бер тигеҙ ашай икән.**

2000 йылда бер кешегә йылына уртаса 109 килограмм икмәк тура килһә, былтыр был һан 98 килограмм тәшкил иткән. Картуфты ла әҙерәк ашай башлағанбыҙ. Емеш-еләк рационларҙа - 2, ит 1,5 тапҡырға артҡан. Һөттән яһалған ризыҡтар, йомортҡа, балыҡ та күпкә күберәк булыуы асыҡланған. Шулай ҙа балыҡ әлегә етерлек кимәлдә ҡулланылмай - бер кешегә йылына 22 килограмм. Шәкәр һәр кешегә 23 килограмм тура килә, был кәнфит, торт, татлы пирожныйҙарҙы иҫәпкә алмағанда, ти белгестәр.

Дөйөм алғанда, һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ғаиләләрҙең 52 проценты белдереүенсә, улар теләгән ризыҡты һатып ала ала. 4 процент ҡайһы сакта аҙыҡ-түлек һатып алыуға аҡса етешмәүе, ә 1 проценты туйғансы ашай алмауы тураһында әйткән. Был төркөмгә инвалидтарҙан, пенсионерҙарҙан ғына торған, шулай уҡ күп балалы ғаиләләр инә.

Балалар туҡланыуына ҡағылған мәғлүмәттәр ҙә ҡыҙыҡлы. Бактиһәң, ғаиләнең килеме ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың туҡланыу рационы бер үк тиерлек. Мәҫәлән, уртаса 80 процент балалар көн һайын ит ашай, һөт һәм һөт ризыҡтары ла ошо кимәлдә. Емеш-еләк менән хәл башҡараҡ, тулы булмаған ғаиләлә тәрбиәләнеүсе балалар уларҙы һирәгерәк күрә. Ә бына ҡоро туҡмас, тиҙ әҙерләнә торған бутҡалар, картуф чипсыһы, торт, кәнфит, шоколад кеүек зарарлы ризыҡтар бар ғаиләләрҙә лә популяр.

Белгестәрҙең иғтибарынан рәсәйҙәрҙең нисек туҡланыуы ла ситтә ҡалмаған. Ир-егеттәрҙең - 9, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 12 проценты иртән эшкә китер алдынан ашап өлгөрмәүе тураһында белдергән. Ир-егеттәрҙең дүрттән бер өлөшө йылы ашты көнөнә бер тапҡыр ғына ашай.

Ҡалала йәшәүселәрҙең 57 проценты, ауыл халҡының 66 проценты дөйөм туҡланыу урындарына бөтөнләй йөрөмәй. Мәктәп уҡыусыларының 30-40 проценты көнөнә бер тапҡыр йылы аш менән тәьмин ителә. Әммә һәр 10-сы бала ашханала ашамай, сөнки унда әҙерләнгән аш тәмһеҙ, тип иҫәпләй. Баланың туҡланыуы өсөн аҡса етмәүе тураһында респонденттарҙың 10 проценты белдергән. Граждандар араһында рестарандар ҙа популяр түгел. Миллионлы ҡалаларҙа йәшәүселәрҙең 48 проценты рестарандарҙа туҡлана, ҙур булмаған ҡалаларҙа ундайҙарҙың һаны - 40 процент.

Алкоголле эсемлектәр менән тәмәке ҡулланыусыларға килгәндә, урта йәштәгеләрҙең 54 проценты спиртлы эсемлек эсеүен белдергән. Ир-егеттәр араһында эсеүселәр күберәк - 64,8 процент. Көн һайын тәмәке тартыусылар - 20,1 процент. Белгестәр иҫәпләүенсә, күптәр үҙҙәренең зарарлы ғәҙәттәре тураһында белдереүҙән тартына. Араҡы һәм тәмәке һатыу күләме менән сағыштырғанда, был һандар ике тапҡырға юғары булырға тейеш.

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөн һәр кем сәләмәт туҡланыуға өҫтөнлөк бирә. Күптәр калорияларҙы һанай, зарарлы ҡылыҡтарҙан баш тарта, витаминдар һәм аҙыҡ өҫтәмәләре ҡабул итә. Әммә ундайҙар һаны ҡатын-ҡыҙҙар араһында күберәк. Көслө зат иһә сәләмәтлегә хаҡында артыҡ ҡайғыртып бармай.

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# АУЫРЛЫҒЫҢ АРТЫҠМЫ?

## Күңелһеҙ тапшырыу ҡарама!

Бөгөнгө көндәлек тормошто телевизорһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Көн әйләнәһенә барған төрлө фильм, тапшырыу, концерт һәм башҡа төрлө тамашалар үҙ ҡараусыһын таба. Ләкин уларҙың барыһы ла ҡыҙыҡлы түгел. Белгестәр иҫәпләүенсә, телевизор алдында ултырып, күңелһеҙ тапшырыу ҡарау кәйефкә генә түгел, ә ауырлыҡҡа ла йоғонто яһай.

Швед ғалимдары бер-нисә төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы тикшергәндән һуң күңелһеҙ телевизион тапшырыуҙар артыҡ килограмдар алып килеүен асыҡлаған. Улар билдәләүенсә, күңелһеҙ булғанда кеше ашау тураһында күберәк уйлай. Телевизорҙан ҡыҙыҡлы булмаған тапшырыу барышында иһә 52 процентҡа күберәк аҙыҡ ауыҙға "оҙатыла". Тәбиғи, бындай мәскәйлек ауырлыҡҡа кире тәьҫир итә һәм килограмдарҙы арттыра. Ә шул уҡ ваҡытта иғтибарҙы йәлеп итерҙәй ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар ашауҙы 35 процентҡа кәмеүә. Әйткәндәй, был ҡағиҙә телевизион тапшырыуҙарға ғына түгел, ә барлыҡ матбуғат сараларына ла ҡағыла.

# ТӨШӨНКӨЛӨК БАҪТЫМЫ?

## Йоҡонда бүлмә!

Ғалимдар билдәләүенсә, бүленгән йоҡо төшөнкөлөккә, тынғыһыҙлыҡҡа, ҡаушауға һәм арыуға алып килә. Бер тапҡыр ғына бүленгән һигеҙ сәғәтлек йоҡоноң һөҙөмтәһе бүленмәгән дүрт сәғәтлек йоҡоға тиң. Өҙөлгән йоҡо мейегә ял итергә мөмкинлек бирмәй.

Кеше бала илауынан, телефон шылтырауынан, тәҙрә артындағы машина тауышынан уянамы - уныһы мөһим түгел. Йоҡо барышында бары тик бер тапҡыр ғына уяныу ҙа ял итеүҙең файҙаһын күпкә кәметә. Быны асыҡлар өсөн Тель-Авив ғалимдары махсус ҡоролмалар ярҙамында 61 кешенең йоҡлауын күҙәткән. Эксперимент күрһәтеүенсә, йоҡолары бүленмәгәндәрҙең кәйефе һәм күңел торошо ваҡыты-ваҡыты менән уянып, кире йоҡлап китеүселәргә ҡарағанда күпкә һәйбәтерәк булған. Ә икенселәрҙә иһә, киреһенсә, төшөнкөлөк һәм һүлпәнлек күҙәтелгән.

# ЙӘШӘРГЕҢ КИЛӘМЕ?

## Спорт менән шөғөлләй!

Һәр кем, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, гел йәш һәм матур булырға теләй. Бының өсөн иң шәп сара - спорт, тип белдерә ғалимдар. Күптән түгел үткәрелгән тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә улар ниндәй спорт төрҙәренең йәшлекте оҙайтыу мөмкинлегенә эйә булыуын асыҡлаған.

Шулай итеп, уртаса кимәлдә эшләнгән аэробик йөкләмәләр - юрғалап йүгереү, бер урында тороп йүгереү, велосипедта йөрөү, йөҙөү - тирене йәшәртә. Турникта ҡулдарҙа күтәрелеү мускулдар һәм мейе өсөн яҡшы. Шәп итеп йөрөүҙе йөрәк һәм тамырҙар "ярата". Йүгереү биттәге йыйырсыҡтарҙы юя. Ә умыртҡа һөйәге ныҡ булһын өсөн йога һәм пилатес менән шөғөлләнеү һәйбәт.

Ләкин һәр нәмәлә сама белеү кәрәк, тип иҫкәртә белгестәр. Мәҫәлән, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы менән бәйле ауырыуҙар булғанда көс талап итә торған күнегеүҙәрҙән баш тартыу дөрөҫөрәк булыр. Умыртҡа һөйәге насар булғанда иһә йүгереүҙән тыйылыу кәрәк. Шулай уҡ умыртҡа һөйәге дискыһы бүҫере бар икән, йога һәм пилатесты оноторға тура килер. Ҡайһы берәүҙәр спорт залында үтә лә күп шөғөлләнә. Был да организм өсөн зарарлы. Күнекмәләр өсөн көн һайын 2-2,5 сәғәттән артыҡ ваҡыт бүлеү мускулдарҙың һәм башҡа ағзаларҙың тиҙ ҡартайыуына булышлыҡ итә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Мөнәсәбәттәр: әгәр кешеләргә яҡшы мөнәсәбәттә булһағыҙ, улар һеҙгә шундай уҡ мөнәсәбәт менән яуап ҡайтарыр**

*Уңыш формулаһының айырым мөһим компоненты - нисек итеп кеше менән яҡшы мөғәмәлә ҡороуҙы белеү.*
*Теодор Рузвельт.*

*Кешеләрҙе белемегеҙҙең ни тиклем күп булыуы ҡыҙыҡһындырмай, улар өсөн үҙҙәре тураһында хәстәрлек күреүегеҙҙең ни тиклем ихлас булыуы мөһим.*
*Джон Максвелл.*

Кеше менән эшләй белеү һәм мөнәсәбәттәрҙе нығытыу һәләте йоғонтоло лидер өсөн мотлаҡ кәрәк. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, эшҡыуарҙар араһында һорау алыу үткәрелеп, уларҙан хеҙмәткәрҙәренең өс төп сифатын күрһәтеүҙәрен һорағандар. Исемлектә беренсе урында кешеләр менән мөнәсәбәт булдырыу һәләте торған: 84 процент үҙҙәрен хеҙмәткәренең еңел аралашыусанлығын күрһәткән. Яуап биреүселәрҙең 40 проценты ғына мөһим сифаттар исемлегенә белемде һәм тәжрибәне ҡуйған. Әгәр кеше менән аралаша белеү ябай хеҙмәткәрҙән талап ителә икән, лидерҙар өсөн был сифаттар ни тиклем мөһим икәнлеген уйлағыҙ. Кешеләр, ысынлап та, үҙҙәре юғары фекерҙә булған һәм үҙҙәренә кем менән аралашыу рәхәт, шуларҙың артынан эйәрә. Ләкин кеше менән аралаша белеп тә, шул уҡ ваҡытта яҡшы лидер түгелһегеҙ икән, атап үтелгән сифаттарға эйә булмайынса ла яҡшы лидер булыу мөмкин түгел.

Яҡшы лидер булған кеше башҡалар менән яҡшы мөнәсәбәтте нығытыу һәм уны үҫтереү өсөн нимә эшләргә тейеш?

**Лидер кешеләрҙе аңларға тейеш**

Лидерҙың беренсе сифаты үҙ-ара мөнәсәбәттәргә ҡағыла. Ул - тирә-яҡтағыларҙың нимә уйлауын һәм тойоуын аңлау һәләте. Төрлө кешеләр менән эшләп, уларҙың әйҙәүсеме йәки эйәреүсеме булыуына ҡарамаҫтан, уртаҡ сифаттар хас икәнен аңлау зарур:

- кешеләргә үҙҙәрен үҙенсәлекле итеп тойоу оҡшай, шуға күрә ихлас күңелдән маҡтағыҙ;
- улар иң яҡшы нәмәнең иртәгә үҙҙәренеке булыуын теләй, шуға күрә күңелдәренә өмөт һалығыҙ;
- улар үҙҙәренә юл күрһәтеүҙәрен теләй, шуға күрә юл ярығыҙ;
- улар эгоист, шуға күрә ихтыяждарын асыҡлағыҙ;
- уларҙың хис-тойғоһо бер кимәлдә генә тормай, шуға күрә йыш дәртләндерегеҙ;
- улар уңыш ҡаҙанырға теләй, шуға күрә уларға енергә ярҙам итегеҙ.

Ошо дөйөм сифаттар барлығын аңлағас та, лидер барыбер үҙен уратып алыусыларҙың һәр ҡайһыһына айырым мөнәсәбәттә булырға тейеш. Һәр кешене айырым күреү, уны аңлау һәләте үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе һаҡлау һәм уңыш нигеҙе булып тора. Һеҙ, йоғонтоло лидер булараҡ, һығылмалы булырға һәм шәхестең дүрт тибы менән дә улар теләгәнсә һөйләшергә, уларҙы үҙегеҙҙең лидерлыҡ стиленә яраҡлаштырырға тейешһегеҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

**Кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан третьего созыва по одномандатному избирательному округу № 14**

## АБДРАХМАНОВ Н.Х.

**от КПРФ**



Абдрахманов Наиль Хадитович родился в 1955 году в г. Магнитогорске Челябинской области. Среднюю школу закончил в с. Кушнаренково РБ. В настоящее время проживает в Орджоникидзевском районе г. Уфы.

Образование высшее профессиональное, в 1978 году закончил Уфимский нефтяной институт по специальности "Технология микробиологических производств" и получил квалификацию инженер-технолог.

После окончания института работал на "Башкирском биохимическом комбинате".

В 1980 году был призван для службы в Вооруженные Силы СССР. Службу проходил в течении 26 лет на различных командных и инженерных должностях Министерства Обороны:

- 1980-1982 гг., в составе ограниченного контингента советских войск в Республике Афганистан;
- 1982-1984 гг., в частях и соединениях Приволжского Военного округа;
- 1984- 1989 гг., в группе советских войск в Германии;
- 1989- 1993 гг., в частях и соединениях Прибалтийского Военного округа;
- 1993-2006 гг., на факультете военного обучения Уфимского государственного нефтяного технического университета (на должностях - преподаватель, старший преподаватель, начальник цикла, начальник учебной части, заместитель начальника факультета).

С 2006 года в запасе. Воинское звание - полковник.

В настоящее время является доцентом кафедры ФГБОУ ВПО "Уфимский государственный нефтяной технический университет", а также по совместительству руководит работой некоммерческой организации "Башкирская Ассоциации экспертов".

Кандидат технических наук, член-корреспондент Академии военных наук Российской Федерации, почетный работник высшего профессионального образования Российской федерации.

Область научных интересов - обеспечение промышленной безопасности опасных производственных объектов за счет минимизации рисков.

Женат, имеет двух дочерей.

**ПЕРВОСТЕПЕННЫЕ ЗАДАЧИ:**

1. Повышение качества услуг ЖКХ;
2. Благоустройство улиц округа и внутридовомых территорий;
3. Финансирование расходов на содержание инфраструктуры Орджоникидзевского района и округа не по остаточному принципу, а пропорционально количеству проживающих граждан;
4. Контроль за расходованием бюджетных денежных средств, в том числе и со стороны граждан;
5. Улучшение экологической обстановки в районе:
   - контроль за выбросом вредных веществ промышленными предприятиями;
   - проведение мероприятий, направленных на устранение существующих загрязнений.
6. Подотчетность муниципальных органов власти гражданам;
7. Повышение уровня жизни населения путем улучшения качества услуг здравоохранения и социальной сферы;
8. Увеличение выделения денежных средств на улучшение жизни и социально-бытовых условий пенсионеров и ветеранов войны и труда, на воспитание и обучение детей в школе и детских садах.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Абдрахманову Н. Х. в соответствии со ст.65 Кодекса РБ№380-з "О выборах"

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# СӘСКӘЛӘР ФЕСТИВАЛЕНӘ РӘХИМ ИТЕГЕҘ!




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

## КҮГҮЛӘН

**Ауылдарҙа урам буйын, йорт-ҡура тирәләрен йәшел келәм булып баҫҡан күгүлән (горец птичий, спорыш) иң ныҡ таралған үҫемлектәрҙең береһелер. Уның ҡарабойҙайға оҡшаған өс ҡырлы ҡара-көрән орлоҡтарын ҡошҡорт, бигерәк тә турғайҙар яратып ашай. Бәлки, шуға күрәләр ҙә уны халыҡ араһында "бәпкә үләне", тип тә йөрөтәләр. Рус халҡында ул "трава-мурава", "птичья гречиха", "гусятник" исемдәре менән билдәле.**

Яңы ғына атларға өйрәнгән баланың йәшел тәбиғәт менән беренсе танышыуы тап бына ошо үҫемлек менән башлана, тиһәк, бер ҙә хаталанмаҫбыҙ төҫлө. Сөнки күгүлән, бая әйтмешләй, ишек алдарын тултырып үҫеп, кеше йөшәмәгән урындарҙа бөтөнләй осрамай тиерлек. Һис һүҙһеҙ, уның орлоҡтарын таратыуға кеше, йорт хайуандары, транспорт ярҙам итә.

Күгүлән - ҡарабойҙайҙар ғаиләһенә ҡараған бер йыллыҡ үҫемлек. Ул - 10-30 см оҙонлоғондағы нәҙек кенә һабаҡлы, ваҡ ҡына овал япраҡлы, аҡһыл-алһыу йәки йәшкелтаҡ төҫтә сәскә атып, ергә түшәлеп үҫеүсән үҫемлек. Күгүлән Башҡортостанда май аҙағынан алып сентябрь бөткәнсе сәскә ата.

Бына ошо аяҡ аҫты тулып үҫкән үлән медицинала алмаштырғыһыҙ ҡиммәтле дарыу үҫемлектәренән һанала. Медицинала ҡулланыу өсөн уның тамырынан башҡа бөтә өлөшөн дә йыйылар. Аптекаларға уны июндән авгусҡа тиклем йыйып тапшырырға мөмкин. Шуныһын иҫтә тоторға кәрәк: төрлө химикаттар ҡулланылған һәм сүп-сар түгелгән урындарҙа үҫкән үҫемлектәрҙе йыйырға ярамай.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы, профессор.**

**33-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Әфлисун. Парикмахер. Айыу. Самокат. Миҡдар. Хафизова. Уҡра. Әхтәмова. Назарова. Трафарет. Әрмәнде. Пасьянс. Үлән. Алабуға. Интрига. Ван. Тәкә. Украина. Дебаркадер. Нурғәлин. Инша. Дуға. Һеркә. Мышар. Йола. Ашлыҡ. Сүрә. Һеләүсина. Старт. Әпше.

**Вертикаль буйынса:** Кәзә. Хәмиҙуллина. Мәүлит. Шом. Игәнә. Руанда. Дана. Парса. Саламандра. Арбат. Шөһрәт. Әлимғолова. Араҡы. Ҡиәфәт. Акула. Инабат. Ребус. Сейә. Хант. Нәһар. Рауза. Планшет. Ағас. Әмер. Артек. Зар. Әҙгәрәй. Яҡупов. Аванс. Атан. Нужа.

✓ *Ат ҡартайыр - майҙан ҡартаймаҫ; егет ҡартайыр - заман ҡартаймаҫ.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



БЫЛ ЙЫЛДА...

# ЙӘМҒИӘТТЕ...

## мәҙәни мөхит тәрбиәләй



**Йылдың Мәҙәниәт йылы билдәһе аҫтында үтеүен район халҡы тоямы?**

**Юлай ХӘЙРЕТДИНОВ, Учалы районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге етәксеһе:** Әлеге мәлдә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ял итә, халыҡ та бесән әҙерләү менән мәшғүл, шуға ғына районда һәм ҡалала бер аҙ тынлыҡ урынлашты. Ә дөйөм алғанда, Мәҙәниәт йылы рәсми асылғандан алып, төрлө саралар күп үтте, әле йыл аҙағына тиклем планлаштырылған эштәр бар. Йыл аҙағында Мәҙәниәт йылына тантаналы шарттарҙа йомғаҡтар яһап ҡуйырға уйлайбыҙ.

Йыл иғлан ителгәс тә, мәҙәниәт бүлектәре, моғайын да, матди яҡтан ниндәйҙер үҙгәрештәр булыуына өмөт иткәндер. Һәр хәлдә, был яҡтан ярҙам ҙур булды. Мәҙәниәт усаҡтарын капиталь ремонтлау, уларҙың матди-техник базаһын нығытыу өсөн республика һәм урындағы бюджеттан аҡса бүленде. 5 йыл элек ауыл клубтарын ауыл Советтары хакимиәттәренән мәҙәниәт бүлегенә күсергәйнеләр, йыл һайын уларҙы ремонтлауға иғтибарҙы былай ҙа күп бүләбеҙ. Иң тәүҙә клубтың түбәһенән һыу ағып тормаһын, йылы булһын, тип тырышабыҙ, сөнки ҡотһоҙ мәҙәниәт усағы үҙенә халыҡты ылыҡтыра алмаясаҡ. Икенсе йыл рәттән клубтар каникулдағы балалар өсөн ихата майҙансыҡтары ойоштора, унда төрлө уйындар, бәйгеләр үткәрелә. Бүлөктәр менән мәғариф идаралығы ярҙам күрһәтә. Заманалар ниндәй генә булмаһын, ҡыҫҡартыуҙар, оптималләштереү янаған саҡта ла ауыл халҡы ла, район хакимиәте лә клубтарҙы һаҡлап ҡалыу яғында булды. Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын төбәк буйынса уртаса хеҙмәт хаҡына еткереү буйынса эштәр алып барыла, был йүнәлештә былтырҙан бирле Мәҙәниәт министрлығы ҙур ярҙам күрһәтә.

Халыҡ иһә беҙҙә гел дәртле, рухлы, әүҙем булды. Ҡасандыр Фәйзи Ғәскәров таланттарҙы тап Учалы ерендә эҙләһә, әле лә яҡташтарым был данды тота. Бөтәһе 37 коллектив халыҡ, өлгөлө, тигән маҡтаулы исем йөрөтә. Уларҙың 10-ы - театрҙар, ҡалғандары хореографик коллективтар. Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжы кадрҙар әҙерләй, был уҡыу йорто бар саҡта мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә, бейеүселәргә бер ҡасан да ҡытлыҡ булмаясаҡ. Мәҫәлән, район белемле хеҙмәткәрҙәр менән тулыһынса тәьмин ителгән. Учалы муниципаль филармонияһы эшмәкәрлеген дә юғары баһаларға кәрәк. Әлеге мәлдә башҡа йүнәлештәрҙә ижад итеүсе төркөмдәр барлыҡҡа килә, мәҫәлән, Ҡунаҡбай музыка мәктәбендә "Алпамыша" тип аталған бик яҡшы этно-төркөм бар. Физик мөмкинлектәре сикләнгәндәр өсөн район мәҙәниәт йортонда вокал-инструменталь ансамбль төҙөй башланыҡ. Ғөмүмән, һәр коллектив тураһында тик маҡтау һүҙҙәрен генә әйтергә була. Улар районыбыҙҙың оло ғорурлығы. Мәҙәниәт усаҡтарының халыҡтың рухын күтәреүҙә өлөшө ифрат ҙур. Ил етәкселәренең ошоно аңлауы ҡиммәт. Мәҙәниәт кимәле юғары булған һайын, йәмғиәт әхлаҡлыраҡ була. Мәҙәни мөхит тәрбиәләй илдең лайыҡлы киләсәген. Шуға ла Мәҙәниәт йылының әһәмиәте лә баһалап бөткөһөҙ.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**яҙып алды.**

ХОККЕЙ

# ТУРНИР ҮТТЕ...

## һығымталар яһалды

**14-18 августа Өфө Континенталь хоккей лигаһының иң көслө командаларын ҡабул итте. Мәскәү өлкәһенең "Атлант"ы, Риганың "Динамо"һы, Магнитогорскиҙың "Металлург"ы, Санкт-Петербургтың "СКА"һы һәм Өфөнөң "Салауат Юлаев"ы Башҡортостан Республикаһы Кубогы өсөн көс һынашты.**

Был турнир хоккей командалары араһында һәр ваҡыт көтөп алынған сара булып тора, сөнки ул уйын миҙгеле алдынан уйынсыларҙың әҙерлеген күрһәтә һәм төп алыштар алдынан репетиция ролен дә үтәй. Быйылғы турнирҙа ҡатнашҡан командаларҙың сығышын ҡарап, уларҙың 2014-2015 уйын миҙгеленә етди әҙерләнеүен күрергә мөмкин булды. Һәр көн "Өфө-Арена" боҙонда икешәр осрашыу уҙҙы. Беренселәрҙән булып алышҡа Вячеслав Быковтың ("СКА") һәм Майк Кинендың ("Металлург") командалары сыҡты. Уйын ғәмәлдәге чемпиондың еңеүе менән тамамланды (1:4). Ошо уҡ көндә уҙған "Салауат Юлаев" һәм "Динамо" командалары осрашыуында ҡунаҡтар көслөрәк булып сыҡты (2:3). Ләкин был еңелеүҙең ҡонон юлаевсылар икенсе көндә "Металлург" менән булған уйында ҡайтарҙы. Улар ҡунаҡтарҙы 2:0 иҫәбе менән ҡыйратты. Ә "Динамо" иһә "Атлант"тан 2:3 иҫәбенә еңелде. Турнирҙың өсөнсө көнө лә көсөргәнешлек буйынса алдағыларынан ҡалышманы. Рига хоккейсыларының Магнитогорск уйынсылары менән осрашыуы 2:0, ә Санкт-Петербург командаһының Мәскәү өлкәһенән килгән ҡунаҡтар менән алышы 3:1 иҫәбе менән тамамланды. Дүртенсе уйын көнө "СКА" ("Динамо") һәм "Салауат Юлаев" ("Атлант") командаларына еңеү алып килде. Кубок яҙмышы 18 августа хәл ителде. Был көндәге "Металлург" һәм "Атлант", "Салауат Юлаев" һәм "СКА" командаларының алышы турнирҙың иң киҫкен, көслө һәм сағыу уйындары булды. "Металлург" был турнирҙа тик бер генә еңеүгә өлгәшә алды, ә ҡалған осрашыуҙарҙа еңелде. Һуңғы бәйгелә лә ғәмәлдәге чемпиондар уңышҡа өлгәшә алманы. Сергей Мозякиндың өс голына "Атлант" уйынсылары дүрт шайба менән яуап бирҙе. Һөҙөмтәлә, Майк Кинен командаһы турнирҙы иң аҙаҡҡы урын менән тамамланы. Юлаевсылар менән "СКА" иһә беренсе урын өсөн көс һынашты. Был ҡапма-ҡаршылыҡта Вячеслав Быков командаһы көслөрәк булып сыҡты һәм хужаларҙы 1:4 иҫәбе менән еңде. Шулай итеп, быйылғы Башҡортостан Кубогы Санкт-Петербург командаһы кәштәһендә үҙ урынын алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Турнир һөҙөмтәләрен барлап, "Салауат Юлаев" хоккей командаһының генераль менеджеры Олег Гросс: "Турнир беҙгә ниндәй хаталар өҫтөндә эшләргә кәрәклеген күрһәтте", - тине. Ысынлап та, һәр тренер үҙ командаһының уйынын күҙәтеп, тейешле һығымталар эшләгәненә шик юҡ. Тимәк, Гагарин кубогы өсөн алыштарҙа Башҡортостан Кубогы ваҡытында булған етешһеҙлектәр юҡҡа сығарылып, командалар тағы ла көслөрәк уйын күрһәтәсәк. Һәр хәлдә, һәр көйәрмән үҙ командаһынан тик еңеүҙәр генә көтә.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ШОҢҠАР ЮҠТА...

## ябалаҡ майҙан тотор

Ат ҡартайыр - майҙан ҡартаймаҫ; егет ҡартайыр - заман ҡартаймаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр кешегә үҙ эше менән генә булырға ҡамасауламаһаң, ул башҡалар эшенә танау тыҡмаясаҡ.

**(Пьер Бомарше).**

Бөгөнгөгә иртәгәне ҡуҙаллау өсөн кисәгеләр кәрәк.

**(Иосиф Бродский).**

Күҙҙән ысҡындырылған осраҡтар ҡайһы саҡта яңынан мөмкинлек булып килеп баҫыусан.

**(Публий Сир).**

Әгәр бер әйбер бер маҡсат өсөн икән, уны икенсеһе өсөн файҙаланырға була.

**(Лао Цзы).**

Лидер тирә-яҡтағыларға дәртләнеп, рухланып мөрәжәғәт итһә, шундай уҡ мөнәсәбәткә осрай.

**(Джон Максвелл).**

Аҡылһыҙ кешеләр - үҙһүҙле, үҙһүҙлеләр аҡылһыҙ була.

**(Бальтасар Грасиан).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт бер батша металды алтынға әйләндереүҙең бөйөк серен белгән аҡыл эйәһе эргәһенә бара һәм унан шулай тип һорай:**

**- Уҡытыусы, һин миңә лә ул серҙе ас һәм ғүмереңдең аҙаҡҡы көндәренә тиклем бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәҫһең. Һиңә мин үҙем батшаларса хөрмәт күрһәтәсәкмен.**

**Ҡарт уны тыныс ҡына тыңлап тора ла, шулай тип һорай:**

**- Ә һин ошо ғилем хаҡына үҙеңдең хакимлығыңды ҡорбан итергә әҙерһеңме?**

**- Был турала һорарға нисек телең әйләнә? - тип асыулана батша. - Мин бит бының өсөн һине яҙаларға бойора алам...**

**- Юҡ, һин улай итә алмайһың, - ти ҡарт. - Минең тәнем физик ауыртыуҙан ҡурҡмай, ә йәнемә тейә алмайһың. Уның хужаһы - Бөйөк Аллаһы Тәғәлә. Хаҡы бер тинлек нәмәләрҙән мәхрүм булыу минең өсөн бер ни тормай...**

**- Һин бик аҡыллы кешелер, моғайын, - ти батша йомшарып, - мин һине яҙамдан ҡотолдорам һәм алмашҡа бер нәмә лә һорамайым, хатта бүләкләйем...**

**Уҡытыусы йылмайып ҡуя һәм былай ти:**

**- Һиңә рәхмәт белдерәм. Бына һин металдың алтынға әйләнеү серен систең дә инде. Һинең мине яҙалау менән янауың - ул тутыҡҡан металдың бер буш киҫәге генә, әммә һин уны миһырбанлыҡ һәм шәфҡәтлелек күрһәтеп, алтынға әйләндерҙең..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 2661



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.